ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10-16 июнь (һөтай)

2023

№22 (1064)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Ташламалы хаҡҡа яҙыл!* ***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 5 июндән 15-нә тиклем ПР905 индексы "Киске Өфө" гәзитенә ташламалы хаҡ менән 738 һум 36 тингә яҙылыу мөмкинлеге бирелә. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**"Әр-рәхим" йәмиғ мәсете төҙөләсәк!**



5

**Уҡырға... Ҡайҙа? Сибайҙа!**



8-9

**Милли кейемдәребеҙ...**

тарих һөйләй



11

**Халҡыбыҙҙың...**

рухи короленә арналды



12-13


@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Өфө калаһының тыуған көнө уңайы менән уны маҡтап, уңайлыҡтары, күңелгә яҡын урындары тураһында телгә алып китәйек әле...***

***Дилә ҒИЛМАНОВА, Әбйәлил районы Асҡар дауаханаһы балалар табибы:*** Беҙҙең Өфө бай тарихлы һәм замандан артта ҡалмайынса үҫешкән ҡалаларҙың береһе. Студент йылдарым ошо ҡалала үтеүе менән бәхетлемен. Әлеге мәлдә районда эшләһәм дә, баш ҡалаға йыш барырға тырышам, сөнки ул үҙенә тарта, ылыҡтыра, һағындыра.

Ҡала ниндәй миҙгелдә лә матурлығы менән һоҡландыра. Ҡышын ҡалаға ингән саҡта һине ап-аҡ тау һәм уға һыйынып ҡына ултырған йорттар ҡаршылай. Был күренеш күңелгә йылылыҡ өҫтәй. Ә йәйен-көҙөн улар сағыу төҫтәр менән ҡаршы ала, оҙатып ҡала.

Ҡасан килгәндә лә ҡала урамдарында таҙартыу, ағартыу, йыйыштырыу эштәре бара. Шулай уҡ иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем шау сәскәгә күмелеп ултырған урамдарҙан үтеү - үҙе бер ғүмер. Ҡайһы берәүҙәрҙең баш ҡала урамдарында сүп-сар күп, тип әйтеүе менән һис тә килешмәйем. Беҙҙең районға яҡын ҡала урамдары торошон күргәндәр Өфөлә был йәһәттән хәлдәр бик яҡшы икәнлеген аңлар ине.

Өфөнө мин йыйнаҡлығы, күркәмлеге өсөн яратам. Тарихи үҙәктәге ағас өйҙәре, йәйгеһен саф һауала йөрөгән мәлдәре күңелемә яҡын. Миллионлы ҡала булһа ла урамда күп таныштарыңды осратыу мөмкинлеге булыуы менән оҡшай. Өфөнөң һалмаҡ, тыныс ритмын яратам. Ниндәйҙер көслө тәьҫораттар артынан, мәҫәлән, башҡа ҡалаларға йүнәлһәк, күңел тыныслығын тик үҙебеҙҙең Өфөбөҙҙә генә табырға була.

## БАЛАЛАР ҠОРО

# "БЕҘ БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШӘСӘКБЕҘ!"



**Бала бар йортта сер булмаҫ, ти. Бына ошо хәҡиҡәтте күҙ уңында тотоп, баш ҡалабыҙҙың күркәм байрамы алдынан халыҡтың иң кескәй һәм дөрөҫтө генә һөйләр өлөшө булған балалар - баш ҡаланың Дим биҫтәһендә урынлашҡан "Аҡбуҙат" 75-се Башҡорт балалар баҡсаһының әҙерлек төркөмөндә йөрөгән тәрбиәләнеүселәре Әмир Заманов, Мәрйәм Хәмид, Рөстәм Сәғитов һәм ошо балалар баҡсаһын тамамлап, 123-сө лицейҙа 1-се класта уҡыған Элина Теләүбаева менән әңгәмә ҡорҙоҡ. Уларҙың яуаптарын һеҙгә лә ишеттерәбеҙ.**

**(Дауамы 6-сы биттә).**

*ИҒТИБАР!*

# БАЙРАМ БЕҘҘӘ, БАЙРАМ!



**12 июндә баш ҡала, ғәҙәттәгесә, бер юлы өс байрамды - Рәсәй көнөн, Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыныуҙың 449 йыллығын һәм башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаевтың тыуыуына 269 йыл тулыуҙы билдәләй.**

"Өфө байрам итә!" тип аталған ҡала фестивалендә иртәнге сәғәт 11-ҙән кискә 5-кә тиклем ҡаланың үҙәк өлөшө төп байрам майҙанына әүереләсәк. Чернышевский урамының Мостай Кәрим урамынан Ленин урамына тиклем арауығы "Мәҙәни Арбат"ҡа әйләнәсәк. Бында кәсепселек һәм күргәҙмә зоналары, интерактив майҙансыҡтар эшләйәсәк, музыканттар һәм рәссамдарҙың ижады менән танышырға мөмкин буласаҡ.

Балалар һәм өлкәндәр өсөн башҡорт милли кейеме (селтәр, ҡамсы, биҙәүестәр) элементтарын эшләү, башҡорт шәлен бәйләү, боронғо туҡыу станогында туҡыу, керамика әйберҙәре эшләү, һүрәт төшөрөү, сәйлән үреү, кейеҙ баҫыу, тимер сүкеү, ағас һырлау һәм башҡа һөнәрҙәр буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәреү планлаштырыла, шулай уҡ баллы прәниктәрҙе биҙәргә, ҡурайҙа һәм ҡумыҙҙа уйнарға өйрәнергә мөмкин буласаҡ. "Башҡортостан үләндәре" етештергән сәй, үлән төнәтмәләре, бәлзәмдән ауыҙ итергә, шулай уҡ күн, туҙ, ебәк әйберҙәр, тәбиғи косметика, биҙәүестәр, сумкалар һ.б. һатып алырға була.

Чернышевский урамының 83-сө йорто эргәһендәге урын йыһан майҙанына әүереләсәк. Өфө ҡала планетарийы унда "Йыһан эргәлә" тип аталған күргәҙмә ойоштораcаҡ, оҫталыҡ дәрестәре, уйын программалары һәм викториналар тәҡдим итәсәк. Барлыҡ теләүселәргә сфера фильмдарын төшөрөү серҙәре тураһында һөйләйәсәктәр. Көн аяҙ булғанда, махсус телескоптан Ҡояшты ҡарарға мөмкин буласаҡ.

**(Дауамы 5-се биттә).**

12+

✓ ***Эйе, һәр кемдең үҙ Өфөһө бар. Минең Өфөм бына шулайыраҡ. Тик, булдыҡһыҙлығым арҡаһында һыйманым мин Өфөгә. Шулай уйлап, үҙемде битәрләй торғайным.***



КӨН ҠАҘАҒЫ

КискеӨфө

*БАШ ҠАЛАМ*



# ҺӘР КЕМДЕҢ ҮҘ ӨФӨҺӨ

**Һәр кемдең үҙ Өфөһө бар. Баш ҡалала йәшәүселәрҙең генә түгел, хатта тау башында балҡыған ҡалала бер тапҡыр ҙа булмағандарҙың да бар үҙ Өфөһө. Һәр кемде ул үҙенсә тарта, ылыҡтыра, ҡабул итә йә юҡ.**

Бөгөнгө йәштәрҙе баш ҡала, минеңсә, киңерәк мөмкинлектәре менән ымһындыра, донъяның матди ҡиммәттәргә йөҙ борған осоронда ҡаланың балҡып тороуы тәүшарт та түгелдер һымаҡ. Ә беҙ Өфөнөң йүкәле урамдары буйлап аслы-туҡлы йөрөргә, Салауат Юлаев һәйкәле эргәһендәге пятачокта нәҡ ауылдағыса тыпырҙатып бейергә, ҡаланың һәр бер тишек-тошоғон белеп, һауаһын һулап, күкрәк киреп үҙ илебеҙҙең баш ҡалаһында йәшәүгә ҡыуанып риза инек. Беҙ, тигәнем, совет осоро студенттары була инде. Әлбиттә, бөтәбеҙ ҙә ҡалманыҡ Өфөлә, әммә ана шул үҙебеҙсә таныған өлөшөн алып таралыштыҡ. Шуға, күп йылдар үткәс барһаҡ, ҡаланы танымай бер булабыҙ. Таныйбыҙ, танымай ҡайҙа, трамвай номерҙарын да иҫләйбеҙ хатта, һауаһы ла шул уҡ, тик...

Тик хәҙер юлдары таҡырыраҡ, тамаҡ туҡ һәм ләззәтле иҫтәлектәре генә бер аҙым ҡалмай арттан эйәреп йөрөй... Бараһың да, ҡайтаһың, танһыҡ та ҡанмай ҡала. Хәҙер бит барыуы ла еңелләште, элекке кеүек, ҡырҡ михнәттәр аша йөрөмәйбеҙ, әммә бөгөнгө шаулы ҡала үҙе танымай, ялтырауыҡлы витриналарға торошло этә-төртә йүгерешкәндәр кәрәк уға. Эйе, заман башҡа, заң башҡа, әммә бит Өфө йүкәләре элеккесә сәскә ата, ҡоштары ла, йола һаҡлап, боронғоса һайрай. Китсе, ҡалала таш диуарҙар араһында ҡоштар һайрамай инде ул, тиерһегеҙ. Һайрай икән шул! Бер мәл, әлеге шул студент саҡта, Нефтселәр мәҙәниәт һарайы эргәһендә Әбйәлилдән алып килеп ҡорған тирмәне һаҡлап, төн үткәрҙек. Таң атыуға, ышанаһығыҙмы-юҡмы, эргәлә генә бер һандуғас шундай өҙҙөрөп һайрай башламаһынмы! Моғайын, тирмәгә ҡуша эйәреп килмәгән бит инде ул. Көндөҙ ҙә һайрайҙыр улар, тик мондо шау-шыу, машина тауыштары ишеттермәйҙер, тим.

Эйе, һәр кемдең үҙ Өфөһө бар. Минең Өфөм бына шулайыраҡ. Тик, булдыҡһыҙлығым арҡаһында һыйманым мин Өфөгә. Шулай уйлап, үҙемде битәрләй торғайным. Әммә Учалы ҡалаһында булған бер осрашыуҙа халыҡ шағиры Рауил ағай Бикбаев менән булған ҡыҫҡа ғына һөйләшеү хәтеремә уйылып ҡалды:

- Һин ниңә Өфөнө ташлап ҡайтып киттең әле ул? - тип һораны Рауил ағай.

- Һыйманым мин Өфөгә, - тинем күңелһеҙ генә.

- Әллә беҙ һыйып йәшәй тиһеңме, - тине шағир, күҙҙәрен ҡыҫа биреберәк, мәғәнәле йылмайып, һәр һүҙенә баҫым яһап.

Ҡыҙыҡ был донъя, миллион кеше һыйған Өфө һынлы Өфөгә нисек һыймаҫҡа мөмкин?.. Тимәк, хәтерҙә, уйҙарҙа, күңелдә алып йөрөгәс, беҙ һәммәбеҙ ҙә барыбер баш ҡаланың бер өлөшө булып ҡалабыҙҙыр. Күңел бит киң төшөнсә!

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

*ӘЙТӘГҮР!*

# БЕҘҘЕҢ ЯРАТҠАН ҠАЛА



**ҺОРАУ: Өфөләге үҙгәрештәргә ниндәй баһа бирерһегеҙ? Ғөмүмән, үҙгәрәме баш ҡалабыҙ?**

***Илдус ӘХМӘТЙӘНОВ:*** Беҙҙең Өфө үҙгәрә, был шикһеҙ. Ләкин ул ҡабаланмай, яйлап ҡына үҙгәрә. Баш ҡалала ниндәйҙер ҙур үҙгәреш булһын өсөн Өфөлә күләмле сара үтергә тейеш. Мәҫәлән, ШОС һәм БРИКС саммиттары өсөн әҙерлек барышында Өфө иҫ киткес үҙгәрҙе. Һәм бына баш ҡаланың 450 йыллығына ҡарата ла байтаҡ эштәр башҡарыла. Шуға күрә Өфөнөң тиҙ үҙгәреүен көтөргә ярамай, минеңсә - бында барыһы ла һәлмәк кенә, әммә юғары кимәлдә үҙгәрә. Ошо үҙенсәлегебеҙ менән дә беҙ, өфөләр, бәлки, күптәрҙән айырылабыҙҙыр әле. Һәр эштә лә тиҙлек түгел, ә сифат тәүге урында тора икәнлеген онотмайынса ғына үҙгәрештәр кисереп йәшәп ятабыҙ.

***Сәлих АСЫЛБАЕВ, Бөрө районы:*** Иң тәүҙә күҙгә, әлбиттә, баш ҡалаға килеп ингән урын ташлана. Мин, мәҫәлән, Затон биҫтәһе яғынан Өфөгә киләм һәм һуңғы ваҡытта был яҡта булған үҙгәрештәр тик ҡыуандыра ғына. Ағиҙел йылғаһы аша асылған яңы күпер, уға тиклемге юлдарҙың төҙөкләндерелеүе күптәрҙең күңеленә хуш килгәндер, тием. Балалар менән ҡалаға килгәндә уларҙы мотлаҡ "Урмансылар паркы"ндағы зоопаркка алып барам. Ғөмүмән, был паркта йөрөү бик оҡшай. Һуңғы йылдарҙа ундағы үҙгәрештәрҙе тик ыңғай яҡтан ғына баһаларға мөмкин: актив уйындар өсөн төрлө майҙансыҡтар булдырыу, ҙур ғына балалар майҙансығын эшләү, ял итеү өсөн махсус ялан бүлеү - барыһы ла халыҡ өсөн эшләнгән.

***Дилбәр ҮҘӘНБАЕВА:*** Хәҙер бына 30 йылдан ашыу яратҡан Өфөмдә йәшәйем. Уның һәр үҙгәрешен күҙәтеп, ҡалаға ҡағылышлы яңылыҡтар менән танышып барам. Ҡала көнләп үҫә. Киңлеккә лә, оҙонлоҡҡа ла, бейеклеккә лә, тип әйтәйем. Әле булһа ҡайҙандыр ер табып, өйҙәр һалалар, иҫкеләре һүтелеп, улар урынына яңылары барлыҡҡа килә, быға тиклем киноларҙа ғына күргән бейек йорттар үҫеп сыға. Төҙөлөш бара икән, тимәк, ҡала йәшәй. Ҡыуаныслы хәл. Һис шикһеҙ, Өфөнө заман талаптарынан ҡалышмайынса үҫешкән мегаполис, тип ауыҙ тултырып әйтергә була.

Өфөнөң ландшафты ни тиклем үҙенсәлекле! Салауат Юлаев һәйкәле эргәһенән тирә-яҡҡа ниндәй матур күренеш асыла! Ҡарап туйғыһыҙ. Айына бер булһа ла ошо майҙанда рәхәтләнеп йөрөп, ял итеп ҡайтыу күңелдәрҙе күтәреп, йәшәүгә дәрт өҫтәп ебәрә. Әгәр ҙә ниндәй ҙә булһа башҡорт телендәге сараға тура килһәк, икеләтә ҡыуаныс, сөнки милләттәштәрҙе күпләп күреп, үҙ телебеҙҙә йыр-моң ишетеп кинәнәбеҙ.

Һәр ҙур ҡалаға хас булғанса, Өфө лә үҙенең күркәм сифаттарына һәм матурлығына эйә, шул уҡ ваҡытта етешһеҙлектәре лә бар. Шулай ҙа ул минең иң яратҡан ҡалам.

***Сәкинә ҒӘҘЕЛШИНА:*** Өфөлә тыуып үҫһәм дә, яҙмыш елдәре алыҫ Үзбәкстан яҡтарына илтте һәм мин унда теүәл 40 йыл ғүмер иттем. Хәҙер баш ҡалала йәшәгәнемә 5 йыл да булып килә, ниһайәт, күңелем үҙ урынына ултырып, тормошом теүәлләнеп ҡалды. Өфөгә ҡайтып китеп йөрөгәндә әле уның йыл һайын үҙгәреп тороуына иҫем китә ине, хәҙер үҙем даими йәшәй башлағас был үҙгәрештең ни тиклем тиҙ темптар менән барыуын күреп торам. Әле бына күптән түгел генә Һупайлы биҫтәһенә юл төштө. Тауҙан төшөп барышлай күҙәтәм - биҫтә үҙе бер ҙур ҡала кеүек икән дә ул, осо-ҡырыйы ла күренмәгән һымаҡ. Улыма: "Бында кешеләр ҙә икенсе һымаҡ", - тиһәм, ҡысҡырып көлдө лә: "Әсәй, барыһы ла шул

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

***Өфө ҡалаһының тыуған көнө уңайы менән уны маҡтап, уңайлыҡтары, күңелгә яҡын урындары тураһында телгә алып китәйек әле...***

***Венер ҒӘЛИМОВ, Куйбышев тимер юлдарының Башҡортостан буйынса территориаль идаралығы бүлек етәксеһе:*** Өфөнө ни өсөн яратаммы? Сөнки ул гөрләп торған ҙур ҡала, бында һәр саҡ ниндәйҙер ҙур саралар уҙа. Мәҫәлән, "1000 велосипедсылар" көнө, "Уҙыш" йүгереү ярышы, күләмле концерт һәм тамашалар - быларҙың барыһы ла Өфөнөң йәшәү рәүешен әүҙемләштерә, энергиялы итә, йәшәүгә дәрт өҫтәй.

Ат яратҡан кеше булараҡ, мин "Аҡбуҙат" ипподромында уҙған сараларҙы ҡалдырмайым. Шулай уҡ Ботаника баҡсаһы, Лимонарий, "Урмансылар", "Еңеү" парктары ғаиләбеҙҙең иң яратҡан урындары. Унда барып, матурлыҡҡа һоҡланып, илһамланып ҡайтабыҙ. Өс яҡлап йылғалар менән уратып алынған Өфөнөң ниндәй бейеклегенән ҡараһаң да күҙ ҡарашы етмәҫлек хозурлыҡҡа тап булаһың.

Һәр кемгә бала сағы үткән урындар ҡәҙерле һәм күңеленә яҡын. Мин үҙем Дим биҫтәһендә тыуып үҫкән кеше булараҡ, Өфөнөң ҡайһы урынында булһам да үҙемдең районым менән сағыштырам. Дим биҫтәһе баш ҡаланың башҡа урындарына ҡарағанда йәшелерәк кеүек миңә, шулай уҡ таҙалыҡ яғынан күпкә өҫтөнөрәк һымаҡ. Шулай уҡ беҙҙең райондың үҙенсәлекле һәм иҫтәлекле урыны - тимер юлы аша үткән күпере, мин унда баҫып, поездарға ҡарап торорға яратам. Минең өсөн Дим биҫтәһе һәм тимер юлы бер-береһенән айырылғыһыҙ күренеш.

Бәләкәй саҡта беҙҙе Салауат Юлаев һәйкәленә алып киләләр ине. Ул ваҡыттарҙа һәйкәлдең тирә-яғы йырып сыҡҡыһыҙ урман булып, унда бысраҡ, ҡараңғы булды. Хәҙер ул урман йәйәүлеләр йөрөр өсөн бик матур һәм уңайлы итеп үҙгәртелеп, өфөләрҙең дә, ҡала ҡунаҡтарының да иң яратҡан урындарының береһенә әйләнде. Шулай уҡ Черкалихин йырынының да бөгөнгө көндәге торошо миңә ныҡ оҡшай, ә унда уҙған иҫ китмәле шәп концерт һәм башҡа төрлө сараларға һоҡланып туйғыһыҙ. Халыҡ-ара кимәлдәге тамашалар уҙғарырлыҡ матур амфитеатр эшләп ҡуйыуҙарына "Афарин!" тиергә генә ҡала.

Өфөбөҙ артабан да матурайһын, үҫһен, йәшәү өсөн уңайлы шарттары булған миллионлы ҡалаларҙың береһе булып ҡалһын.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Быйылғы йылдың апрель айы йомғаҡтары буйынса Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Волга буйы федераль округындағы коллегалары араһында беренсе урын яуланы. "Медиалогия" эксперттары аңлатыуынса, Радий Фәрит улы Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға иң әүҙем ярҙам итеүсе етәксе. Бынан тыш, баһалаусылар тарафынан Башлыҡтың мәктәпкәсә йәштәге балалар учреждениелары уҡытыусыларына 500-әр һумлыҡ 50 грант булдырыу, Шишмә районындағы Күсмә халыҡтарҙың Евразия музейы төҙөлөшөн даими контролдә тотоу кеүек эштәре лә иҫәпкә алынған.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Белорет районы буйлап эш сәфәре барышында эшҡыуарҙар менән осрашты. Был хаҡта ул үҙенең социаль селтәрҙәрендә хәбәр итте. "Белоретта төрлө йүнәлештә эшләгән бер нисә компания вәкилдәре менән аралаштым. Беҙҙең ярҙам саралары эшләй, эшҡыуарҙар улар менән файҙалана. Әммә шул уҡ ваҡытта беҙҙең бурыс - документтар тапшырыу процедураһын мөмкин тиклем ябайлаштырыу, ҡайһы берҙә кешеләр ҡағыҙ өйөмөнән ҡурҡып, бер ҡайҙа ла ғариза бирмәй", - тип билдәләне ул.

✓Мосолмандарҙың Мәккәгә хаж ҡылырға юлланыуына бәйле Федераль именлек хеҙмәтенең сик буйы идаралығы Рәсәй сиген үтеү тәртибе тураһында иҫкә төшөрә. Сәғүд Ғәрәбстаны Короллегенә инеү өсөн Рәсәй гражданы паспорты, шулай уҡ күрһәтелгән дәүләттең визаһы кәрәк. Өлкәндәрһеҙ йөрөгән балиғ булмағандарҙың үрҙә һанап үтелгән документтарынан тыш, законлы вәкилдәрҙең нотариаль ризалығы булырға тейеш. Суд һалған йөкләмәләрҙе үтәүҙән баш тартҡан хажға юлланыусыларға илдән сығырға рөхсәт итмәүҙәре ихтимал.

✓Тиҫтәләгән кешенең ғүмерен ҡыйған "Мистер Сидр" эсемлеге республикабыҙға ла килтерелгән. Был хаҡта Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығы хәбәр итә. Мәғлүмәттәр буйынса, Ҡурған, Ульяновск, Һамар, Түбәнге Новгород, Пенза өлкәләрендә, Удмурт һәм Сыуаш республикаларында 29 кеше ошо эсемлектән ағыуланып үлгән. Әлеге төбәктәрҙә йәшәгән тағы ла 60-тан ашыу кеше - табиптар күҙәтеүе аҫтында. Башҡортостандың Роспотребнадзор идаралығы республика магазиндарында ошо эсемлекте эҙләү менән шөғөлләнә.

***✓ Һәм килгән һайын Өфөнө башҡа ҡалалар менән сағыштырам да уның барыбер ҙә матурыраҡ һәм йәшеллеккә мул булыуын билдәләйем. Һуңғы килеүемдә ҡала урамдарында ҙур, яңы, заманса автобустарҙың күп булыуына иғтибар иттем.***



өфөләр инде", - тип яуап бирҙе. Бәлки, шулайҙыр, ләкин бында әллә нинә тормош һәлмәгерәк аҡҡандай тойолдо, кешеләре лә ашыҡмаған кеүек, хатта магазиндарында ла яйлап ҡына һатыу итеп торалар. Урамдары төҙөк, йорттары бер иш кенә күбеһе. Һәм, иң мөһиме, йорттарҙың тышына ҙур итеп адрестар яҙып ҡуйылған. Өфөнөң үҙәгендә, Октябрь проспектында, гөмүмән, баш ҡаланың күп урамдарында кәрәкле адресты тапмай йөрөгән саҡтар күп. Бигерәк тә минең кеүек күҙҙәре яҡшы күрмәгәндәргә ауыр - йә ул адрестар бәләкәй генә итеп яҙылған, йә бөтөнләй юҡ...

***Артур ФАЗЛЕТДИНОВ:*** Мин Өфөлә тыуҙым һәм ошонда йәшәйем. Эшем буйынса күп илдәргә командировкаларға йөрөйөм, Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә йыш ҡына ял итәм һәм һәр сәфәрҙән үҙемдең тыуған ҡаламды һағынып ҡайтам. Баш ҡала көндән көн ҙурая, халыҡ та арта. Төҙөлөш ныҡ әүҙем бара, ҡалҡып сыҡҡан яңы йорттарҙың, сауҙа үҙәктәренең, ҡунаҡханаларҙың иҫәбе-һаны юҡ. Ләкин, ҡыҙғаныска күрә, ул йорттарҙан уртаса йәшәгән Өфө кешеһенең фатир алырға хәленән килмәй, сөнки хаҡтары яҡын барырлыҡ түгел. Шуға күрә социаль торлаҡ төҙөү мәсьәләһен бер нисек хәл иткәндә, әллә күпме кеше үҙенең йортонда йәшәү мөмкинлеге алыр ине. Өфөлә студент булыу өсөн бөтә шарттар ҙа тыуҙырылған. Урта махсус уҡыу йорттары ла бихисап, төрлө йүнәлеш буйынса юғары белем алырға теләүселәргә лә юлдар асыҡ, аҫтаҡтар ҙа етерлек. Шул уҡ ваҡытта балалар баҡсалары етешмәй, мәктәптәрҙә икешәр смена уҡыйҙар. Ошо мәсьәләләр яҡын киләсәктә ыңғай хәл ителеренә өмөт бар.

Өфө матур, заманса стилдәге йорттар менән бер рәттән, үткән һәм унан алдағы быуаттарҙа төҙөлгән биналарҙы ла күрергә була. Тарих менән бөгөнгө йәнәшә атлауы менән дә күңелемә яҡын баш ҡалабыҙ.

***Миңзәлә АБДУЛЛИНА, Силәбе ҡалаһы:*** Һәр кемгә үҙенең тыуып үҫкән ауылы, ҡалаһы яҡын һәм ҡәҙерле. Минең күңелем түрендә иһә һәр ваҡыт республикабыҙҙың баш ҡалаһы - Өфө. Үҙем күптән ситтә йәшәһәм дә, Өфөмә йылына бер нисә ҡайтып әйләнәм. Һәм килгән һайын Өфөнө башҡа ҡалалар менән сағыштырам да уның барыбер ҙә матурыраҡ, күркәмерәк һәм йәшеллеккә мул булыуын билдәләйем. Һуңғы килеүемдә ҡала урамдарында ҙур, яңы, заманса автобустарҙың күп булыуына иғтибар иттем. Элекке ПАЗ автобустары, күпселек осраҡта, тыштан да, эстән дә бысраҡ булыуы менән иҫтә уйылып ҡалған. Уларҙың бер-береһен уҙырға тырышып, салондағы пассажирҙарҙың хәүефһеҙлегенә ҡул һелтәп, Өфө урамдары буйлап елдереүе үткәндә ҡалып бара һәм был, шәхсән минең өсөн, шатлыҡлы ваҡиға.

Ҡала күҙгә күренеп ҙурая. Һәм йорттар ҙа бейегерәк була бара. Беҙҙең бала саҡ, йәшлек йылдары уҙған ыҡсым ихаталар, ағас йорттар юғала бара. Әлбиттә, быны күреү күңелгә ҡыйын, ләкин тормош дауам итә, эргә-тирәлә барыһы ла үҙгәрә, яңыра, алмаштырыла. Шуға күрә дүрт ғаилә һыйҙырышлы ике ҡатлы ағас йорт урынына йөҙәрләгән ғаиләне фатирлы итәсәк бейек йорттарҙың ҡалҡып сығыуы замана талабы. Шулай ҙа был изге гәмәл Өфөнө бар йәмғиәткә йәшел ҡала булараҡ билдәле иткән ағастарҙы ҡырмаһа икән. Бер йортто күтәреү өсөн, бәлки, ярты йыл да етәлер, ләкин бер ағас үҫеп буй еткән өсөн әллә күпме йылдар кәрәк. Бөгөнгө хаҡында ғына уйлап, киләсәккә ҡул һелтәмәһәләр ине, тип теләге килә. Балаларға фатир ҡалдырып та, улар таҙа, саф һауаға сарсап йәшәһә, был аҙымдан ни файҙа. Ә йәшел урман - йәшел ҡалҡан.

Өфөм - матур хәтирәләр ҡалаһы, бала сағым һәм йәшлегем үткән гәмһеҙ осором. Ниндәй генә үҙгәрештәр кисерһә лә, баш ҡалам минең өсөн элекке кеүек үк яҡын һәм ҡәҙерле. Ҡалаға ҡағылышлы һәр яңылыҡ һәм үҙгәреш тик яҡшылыҡ алып килһен.

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Өфө ҡалаһының тыуған көнө уңайы менән уны маҡтап, уңайлыҡтары, күңелгә яҡын урындары тураһында телгә алып китәйек әле...***

***Айгиз СӘЙФУЛЛИН, эшҡыуар, Белорет ҡалаһы:*** Өфөгә барып-китеп кенә йөрөһәм дә, ул миңә республикамдың баш ҡалаһы булараҡ бик тә яҡын һәм ҡәҙерле. Ағас, төҙөлөш эштәре менән булғас, үҙем ошо өлкәлә эшләгән магазин, базарҙарға иғтибар итәм. Был йәһәттән баш ҡалала бөтә уңайлыҡтар ҙа булдырылған - сөйҙән алып бураһына тиклем һатып алырға була.

Күп ҡалаларҙа йөрөргә тура килә, шулай уҡ Рәсәйҙең төрлө төбәгенән ҡунаҡтар ҙа йыш килә. Әлегә тиклем бер кем дә Өфө тураһында насар һүҙ әйтмәне һәм артабан да шулай булырына ышанам. Ҡазан һәм Екатеринбургтан килгәндәр Өфөнөң йәшеллегенә күҙҙәре ҡыҙа, ә Мәскәү халҡы тығыҙлығына күнеккән хайран ҡала. Эйе-эйе, беҙҙең ҡаш емереп көйәләнгән Һупайлы бисәтһе янындағы, Өфөгә төрлө яҡлап ингән ерҙәрҙәге тығындар улар өсөн бик көлкә тойола.

Миңә Ағиҙел ярын төҙөкләндереп ҡуйыуҙары бик оҡшай. Элек үҙән баҫып бөткән, ял итерлек яйлы урыны ла булмаған яр буйы хәҙер заманса, матур итеп эшләнгән, эскәмйәләр ҡуйылған, балаларға бәүелсәктәр эленгән, ашап алыр өсөн махсус урындар ҙа булдырылған.

Черниковка бисҭәһенең үҙенсәлекле архитектура өлгөләре, ҡала буйлап урынлашҡан арт-объекттар, Өфөнөң төрлө урамында урынлашҡан фонтандар, парктар, аҫылмалы күпер - барыһы ла күңелемә яҡын.

Һөнәрем буйынса тарих уҡытыусыһы булараҡ, мин музейҙарға йөрөргә яратам. Өфөгә барған һайын ҡаланың бер музейына мотлаҡ инеп сығам. Шөкөр, бындай уникаль мәҙәни усаҡтар баш ҡалала күп булыуы һайлау мөмкинлеге бирә.

Республикабыҙҙағы ике дәүләт теленең дә баш ҡалала киң ҡулланылыуын күреү ҡыуаныслы. Әлбиттә, был йәһәттән башҡараһы эштәр күп, ләкин улар төҙәтелер, әлтаҡталар, реклама афишалары урыҫ телендә лә, башҡортса ла дөрөҫ яҙыла башлар, тип өмөтләнәм.

Һуңғы йылдарҙа ҡала кварталдары араһында балалар майҙансыҡтарының күпләп урынлаштырылыуы оҡшай. Шулай уҡ спорт менән шөғөлләнеү өсөн дә махсус интентарь ҡуйып йыһазландырылған майҙансыҡтарҙын артыуы баш ҡаланың йөҙөн биҙәй.

**Гөлназ МАНАПОВА**
**яҙып алды.**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# АҘНА БУЙЫ...

## көтөп алырлыҡ гәзит!



**Бөгөн, бәлки, ҡағыҙға баҫылған ваҡытлы матбуғатты уҡыу модала ла түгелдер, һәр хәлдә, ейәнсәрем: "Олатай, бер аҙна буйы шул гәзитеңде көтәһең, интернетты ас та уҡы йөнең теләгән хәбәрҙе, яңылыҡты", - ти. Бер аҙна көтәһең, тигәне минең иң ятраҡан баҫмам - "Киске Өфө" тураһында булыр. Эйе, хәбәрҙең ниндәйе генә юҡ та хәҙер, уны таратыу ысулының да ниндәй генә төрө юҡ. Ләкин бында бит эш гәзиткә баҫылған яңылыҡты йәки мәҡәләне уҡыуға ҡайтып ҡалмай, ә уның күңелгә ятышлы булыуына барып бәйләнә.**

"Киске Өфө"нөн тыш, тағы ла күп кенә гәзит-журнал алдырам. Хаҡлы ялда булғас, ваҡыт күп, әйҙә, рәхәтләнеп уҡы ла уҡы. Һәр баҫманың да үҙенә генә хас үҙенсәлеге бар, уларҙың һәр береһе күңелгә ятышлы, ләкин иң яратып уҡыған гәзитем "Киске Өфө". Баҫманың стиле, уҡыусыға яҡынлығы, тос фекере, үҙенең ҡарашы, башҡа гәзиттәр күтәрмәгән сетерекле темаларға иғтибары оҡшай миңә.

Үҙем бала саҡтан тарих менән ҡыҙыҡһынған кеше булараҡ, бигерәк тә гәзиттәге тарихи материалдар оҡшай. Ғүмерҙә ишетмәгән-белмәгән тарихи әйберҙәр тураһында бәйән иткәлә гәзиттә, халҡыбыҙҙың данлыҡлы шәхестәре тураһында әллә күпме мәғлүмәт бирелә, уларҙы уҡый-уҡый күп нәмәгә күҙҙәр асылып китә. Бына ҡайҙа ул ташҡа баҫылған һүҙ көсө! Ул кешенең зиһенен аса, теге йәки был мәсьәләгә, хәлгә икенсе яҡтан тороп ҡарарға мөмкинлек бирә.

Аҡыллы кешеләрҙең аҡыллы һүҙҙәре яҙылған рубриканы ла яратып уҡып барам. Тәрән, төплө фекерҙе тос ҡына итеп әйтә белеүселәр һәр ваҡыт йәмғиәтте һоҡландырған, шуға күрә лә уларҙың әйткәне быуаттар дауамында ла юғалмайынса һаҡланып килә. "Киске Өфө"гә ошо рубрикаһын юғалтмайынса дауам итһен ине, тигән теләктә ҡалам.

Баш ҡаланан әллә ни алыҫта йәшәмәһәм дә, юл һирәк төшә. Эш юҡ, йомош юҡ - ни эшләп йөрөмәк кәрәк инде унда. Шулай ҙа Өфөлә барған үҙгәрештәр тураһында ла хәбәрҙар булып торғо килә. Был йәһәттән гәзиттәге "Баш ҡалам" рубрикаһы бик тә йәтеш. Ундағы мәҡәләләрҙе уҡыйым да: "Ә-әә, Өфөлә шундай төҙөлөш бара икән, бындай үҙгәрештәр булған икән", - тип баш ҡала тураһында әҙме-күпме белеп торам.

Ауылда йәшәп тә баҡса үҫтермәүҙе күҙ алдына килтерә алмайым, әллә ни ҙур булмаһа ла баҡса тотабыҙ ҡатыным менән. Шуға күрә гәзиттә баҫылған баҡсасыларға тәғәйенләнгән кәңәштәр бик тә ярап ҡала. Шулай уҡ ошо өлкәлә эшләгән белгестәр фекерен дә энәһенән-ебенә тиклем уҡып барабыҙ. Бик мәслихәт эш бындай мәҡәләләр биреп барыу. Мөмкинлектән файҙаланып, мал-тыуар ҡарауға бәйле мәҡәләләр ҙә бик урынлы булыр ине, тип уйлайым. Фермерҙарыбыҙ бар, Аллаға шөкөр, йәштәрҙең был өлкәне күпләп үҙ итә башлауы ҡыуандыра. Улар менән әңгәмәләр бик тә уҡымлы булыр ине.

"Киске Өфө" гәзитенә артабан да уңыштар теләп ҡалам. Замана һынауҙарына бирешмәйенсә, беҙҙә, менәрләгән гәзит уҡыусыларығыҙҙың рухи һыуһынын ҡандырыр усаҡ булып янығыҙ оҙаҡ йылдар. Шуны белегеҙ: "Киске Өфө" гәзите аҙна буйы түҙемһеҙләнеп көтөп алыр гәзит ул!

**Әхмәт ҒИМРАНОВ.**
**Архангел районы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы "Башавтотранс" предприятиеһының генераль директоры Надир Самиевҡа һәм коллективҡа намыҫлы хеҙмәт өсөн рәхмәт белдерҙе. Ул үҙенең хакимиәте етәксеһе Максим Забелинға "Башавтотранс" автобустары водителдәрен наградаға тәҡдим итергә ҡушты. Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, айырыуса гуманитар йөк һәм махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙы ташыуҙа ҡатнашҡан водителдәргә иғтибар итергә кәрәк.

✓Радий Хәбиров республиканың иң яҡшы баҡсасылыҡ ширҡәттәре өсөн Башҡортостан Башлығының йыллыҡ грантарын булдырыу тураһында указға ҡул ҡуйған. Документ баҡсасылыҡ ширҡәттәрен төҙөкләндереүгә, ошо биләмәлә йәмәғәт инфраструктураһын үҫтереүгә һәм хәүефһеҙлек сараларын тәьмин итеүгә йүнәлтелгән.

✓Мәскәүҙә IX "Ҡыҙыл майҙан" китап фестивале үтте, унда Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте лә ҡатнашты. Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫ йылына арналған китап программаһында нәшриәтебеҙ Айгөл Камалиеваның "Башҡорт тамбуры тылсымы" китабы өсөн көмөш диплом менән бүләкләнде һәм Рәсәй халыҡтары йортонан рәхмәт хаты алды.

✓Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин әйтеүенсә, "Мәләүез районының "Йәшел имәндәр" һәм "Дуҫлыҡ" балалар һауыҡтырыу лагерҙарында Луганск Халыҡ Республикаһының Красный Луч ҡалаһынан 297 бала өсөн беренсе смена асылды. "Башинформ" бйыйыл йәй Башҡортостан лагерҙарында Луганск һәм Донецк халыҡ республикаларынан 7-15 йәшлек 2000 бала, шулай уҡ уларҙы оҙатып йөрөгән өлкәндәрҙең ял итәсәге тураһында хәбәр иткәйне.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары беренсе уҡыуҙа "Башҡортостан Республикаһында бала хоҡуҡтарының төп гарантиялары тураһында "Башҡортостан Республикаһы Законына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проектын ҡарарға ниәтләй. Ул балаларҙы традицион булмаған енси мөнәсәбәттәрҙе пропагандалауҙан һәм енесте үҙгәртеү теләген тыуҙырырға һәләтле мәғлүмәттән яҡлауға йүнәлтелгән, тип хәбәр итә республика парламентының матбуғат хеҙмәте.

***✓ "Башҡортостан киң мәғлүмәт сараларын башҡа төбәктәргә өлгө итеп ҡуйырға мөмкин тип уйлайым, - тине ул. - Йөҙҙән ашыу баҫма, милли телдәрҙә баҫылғандары ла күп, барыһы ла бик яҡшы эшләй".***



ҠЫҪҠАСА

# ТАҒЫ БЕР ПОЛК

**"Башҡортостан" ирекле мотоуҡсылар полкын төҙөү июнь аҙағында тамамлана. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика етәксеһе хәбәр итте.** Хәрбиҙәр ике-өс ай хәрби әҙерлек үткәс, алғы һыҙыҡҡа юллана. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 1 июндә Өфөнөң Совет майҙанында Алексей Сухоруков исемендәге артиллерия батареяһын һәм Әхмәт Дәүләтов исемендәге башҡорт медицина ротаһын оҙатыу тантанаһы үтте. Улар "Башҡортостан" ирекле мотоуҡсылар полкы составына инә. "Башинформ" агентлығы хәбәр иткәнсә, уның составында совет партизаны һәм данлыҡлы разведчик Даян Мурзин, Советтар Союзы Геройы Таһир Күсимов исемендәге ирекле батальондар, Мөғин Нагаев исемендәге артдивизион бар.

✓ **Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә X Рәсәй һәм Беларусь форумына әҙерлек эштәре хаҡында һөйләне.** "29 майҙа Рәсәй һәм Беларусь төбәктәренең X форумын әҙерләү буйынса Рәсәй һәм Белоруссия ойоштороу комитеттарының кәңәшмәһен үткәрҙек. Был форум республикабыҙҙың мөһим ваҡиғаларының береһе булмаҡсы. Программаны, делегациялар составын, ваҡиғалар һәм эшлекле майҙансыҡтар әҙерләүҙе тикшерҙек", - тине Радий Хәбиров. Билдәләнеүенсә, 26-28 июндә Башҡортостанда ике ил төбәктәренең хеҙмәттәшлек итеүенә йомғаҡ яһала. Сараларҙа Рәсәйҙең Федерация Советы рәйесе Валентина Матвиенко һәм Беларусь Милли Йыйылышының Республика Советы рәйесе Наталья Кочанова ҡатнаша.

✓ **Башҡортостан биләмәһендә пилотһыҙ аппараттар менән файҙаланыу туҡтатылды, был пилотһыҙ осҡостарҙың Мәскәүгә һәм Мәскәү өлкәһенә һөжүменә бәйле.** Был хаҡта янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеү мәсьәләләренә арналған брифингта Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Ирек Сәғитов белдерҙе. "Килеп тыуған хәлдән сығып, Башҡортостан Башлығы указы менән республика биләмәһендә барлыҡ пилотһыҙ аппараттарҙың осоуын туҡтатыу тураһында ҡарар ҡабул ителгән. Уларҙы ҡулланырға рөхсәт биреү мәсьәләһен бары тик махсус эш комиссияһы ғына ҡарай. Беҙ комиссия, хоҡуҡ һаҡлау органдары менән предприятиеларҙан һәм ойошмаларҙан килгән һәр заявканы тикшерәбеҙ. Тәртипһеҙ осоштар шунда уҡ туҡтатыласаҡ, ғәйепләләр административ яуаплылыҡҡа тарттырыласаҡ", - тине Ирек Сәғитов.

✓ **Башҡортостандың Мәғариф һәм фән министрлығы республиканың гранттар буйынса советы менән берлектә 2023 йылда йәш ғалимдарға - аспиранттарға һәм фән кандидаттарына дәүләт ярҙамы күрһәтеү өсөн республика бюджетынан субсидиялар формаһында гранттар конкурсын үткәрә.** Ғаризаларҙы һәм документтарҙы 2023 йылдың 30 майынан 28 июненә тиклем тапшырырға мөмкин."Башҡортостан Башлығы Указы менән 2021 йылдан йәш ғалимдарға гранттар булдырылды, - тине Башҡортостан Республикаһының мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин. - Уларға ярҙам өсөн йыл һайын республика ҡаҙнаһынан 30 миллион һум бүленә, шул иҫәптән 10 аспирантҡа - 500 мең һум, 10 фән кандидатына - 1 миллион һум, грант 2 йылға иҫәпләнгән". Айбулат Хажин һүҙҙәренсә, 2022 йылда ғаризалар 2021 йылға ҡарағанда ике тапҡырға тиерлек күберәк тапшырылған. Был йәштәрҙең илебеҙ фәнен үҫтереү менән ҡыҙыҡһыныуы хаҡында һөйләй.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# "АҠЫЛ ӨСӨН КӨРӘШ"




**Өфөлә киң мәғлүмәт сараларының "Медиайыйын-2023" форумы булып үтте. Унда республика медиа-берләшмәһенең 600-гә яҡын вәкиле, Башҡортостан Башлығы һәм федераль ҡунаҡтар - Рәсәйҙең Журналистар союзы рәйесе Владимир Соловьев, Russia Today каналының баш мөхәррир урынбаҫары Анна Белкина һәм башҡалар ҡатнашты. Форум Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башланғысында өсөнсө йыл үткәрелә һәм республиканың медиа-берләшмәһе тормошонда мөһим ваҡиғаға әүерелде. Ағымдағы форум "Аҡыл өсөн көрәш" девизы менән үтте.**

Бөгөнгө заман медиамайҙаны ни яғы менән үҙенсәлекле? Әлбиттә, тиҙ үҙгәреүсән тулҡында йәшәүе, эшләүе менән. Ә бөгөн ул бигерәк тә ошо үҙгәрештәр солғанышында, һәм журналистар йәмғиәтенең тәжрибә уртаҡлашыу, уртаҡ маҡсаттар билдәләү өсөн үҙ-ара аралашыуы, фекер алышыуы үтә мөһим. Ошо маҡсат ғәмәлгә ашырылды ла инде әлеге форумда. Рәсәй Журналистар союзы рәйесе Владимир Соловьевтың әйткәндәрен тыңлайыҡ: "Журналистик берләшмәне хәҙер бөтә йәмғиәтебеҙ менән бер үк мәсьәлә борсой, фронт һыҙығындағы хәл өсөн күңел һыҙлай, беҙҙең хәрби корреспонденттарҙың нисек эшләүе борсой. Мин үҙем бик күп ҡыҙыу нөктәләр аша үттем, хәрби хәрәкәт барғанда Балҡанда 10 йыл самаһы эшләнем, Чечен һуғыштарында булдым һәм башҡалар. Был тәжрибәне коллегаларға ла тапшырырға кәрәк. Мин ил буйлап күп сәйәхәт итәм, студенттар менән осрашам, егеттәр генә түгел, хатта ҡыҙҙар ҙа, нисек хәрби хәбәрсе булырға, тип һорай. Эйе, был беҙҙең эштең бер өлөшө һәм беҙгә коллегаларыбыҙҙы экстремаль ситуацияларҙа нисек эшләргә кәрәклеген яҡшы әҙерләргә кәрәк. Беҙҙең төп бурыс - журналистарҙың хоҡуҡтарын яҡлау".

Журналистик берләшмә етәксеһе шулай уҡ Башҡортостандың медиа йәмғиәте тураһында ла фекерҙәрен белдерҙе: "Башҡортостан киң мәғлүмәт сараларын башҡа төбәктәргә өлгө итеп ҡуйырға мөмкин тип уйлайым, - тине ул. - Йөҙҙән ашыу баҫма, милли телдәрҙә баҫылғандары ла күп, барыһы ла бик яҡшы эшләй. Бик ҡеүәтле журналистик корпус тупланған бында..."

Форумдағы сараларҙың барыһы ла бик ҡыҙыҡлы, әһәмиәтле булыуын билдәләп, беҙ улар тураһында ҡайта-ҡайта һөйләрбеҙ, яҙырбыҙ, тибеҙ, ә бына Башҡортостан Башлығы сығышындағы ҡайһы бер фекерҙәрҙе еткерә тормаҡсыбыҙ. "Башҡортостан үҙенең милли матбуғаты менән ғорурлана ала, - тип билдәләне Радий Фәрит улы.- Бөгөнгө ауыр шарттарҙа мәғлүмәт менән эшләү мәсьәләһе айырыуса мөһим. Бында журналистарҙың төп бурысы - дөрөҫ мәғлүмәт алып барыу, илебеҙҙең һәм республиканың нисек үҫешеүе, нимә менән шөғөлләнеүебеҙ, төҙөүебеҙ, булдырыуыбыҙ, бәлки, ҡайҙалыр хаталаныуыбыҙ хаҡында һөйләү..."

Радий Хәбиров билдәләүенсә, Көнбайыш Рәсәйгә иҡтисади һуғыш иғлан итеп кенә ҡалманы, илебеҙгә ҡаршы мәғлүмәти һуғыш та алып бара. Бөгөн журналистар был һуғышта ҡатнаша һәм уларҙың бурысы махсус хәрби операция зонаһындағы егеттәрҙеке кеүек ҡатмарлы - улар мәғлүмәт фронтында еңергә тейеш...

Һүҙен дауам итеп, Башҡортостан Башлығы республика журналистары күптән көткән хәбәрҙе лә еткерҙе: 1 июлдән дәүләт киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы күтәреләсәк. Бынан тыш, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияның күләме 500 мең һумға тиклем арттырыласаҡ. Радий Хәбиров шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы Башлығының публицистик премияһы булдырылыуы тураһында ла белдерҙе. Дәғүәселәр өсөн төп критерийҙар булып ышаныслылыҡ, намыҫлылыҡ, объективлыҡ торасаҡ...

Шулай итеп, Рәсәй Журналистар союзы секретариатының Башҡортостан Башлығын "Профессиональ берләшмә алдындағы хеҙмәттәре өсөн" почет билдәһе менән бүләкләүе осраҡлы түгел, тимәк. "Бындай награданы журналистарға даими ярҙам күрһәткән бер нисә генә губернатор алды..."- тине Владимир Соловьев.

# БАШҠОРТ СУВЕНИРҘАРЫ...

**"Урал аръяғы-2023" инвестиция һабантуйында башҡорт сувенирҙарының беренсе маркетплейсы менән таныштырҙылар. Башсувенир.рф сайты тураһында Башҡортостанда халыҡ сәнғәте кәсептәре үҫешенә арналған түңәрәк ҡорҙа һөйләнеләр. Унда РФ Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы департаментының бүлек етәксеһе Мария Козлова ла ҡатнашты.**

- Рәсәйҙең 60 төбәгендә яҡынса 350 предприятие халыҡ кәсептәрен үҫтереү йүнәлешендә эшләй. 2018 йылдан бындай предприятиеларға 2,45 млрд һум субсидия бүленде. Ошо өлкәлә хеҙмәт иткән кешеләргә (улар 30 меңдән ашыу) ярҙам итеү, Рәсәй мәҙәниәтенең мөһим бер өлөшөн популярлаштырыу маҡсатында 2022 йылда Президент айырым байрам булдырҙы, беҙ уны 18 июндә билдәләйбеҙ, - тине Мария Козлова.

Башҡорт сувенирҙары интернет-магазинының беренсе һатып алыусыһы Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры, сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры Александр Шельдяев булды. Ул "Шаймуратка" тип аталған шапка һатып алды. "Беҙҙә бындай шәп бүректәр генә текмәйҙәр. Башҡорт оҫталары биҙәүестәр, музыка ҡоралдары, прополистан косметика, башҡа әйберҙәр яһай. Беҙҙең бурысыбыҙ иһә - уларға ярҙам итеү. Быйыл бының өсөн республика бюджетынан 11 млн һум бүленә", - тине вице-премьер.

Республикала шулай уҡ "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған халыҡ сәнғәте кәсептәре оҫтаһы" исеме булдырыласаҡ. Дәүләт Йыйылышы ултырышында был закон проектының тәүге уҡыуҙары үтте. Эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Рөстәм Афзалов әйтеүенсә, 2025 йылға тиклем халыҡ сәнғәте кәсептәрен үҫтереү буйынса саралар планы ҡабул ителгән, унда субсидиялар бүлеү ҙә ҡаралған. "2022 йылда 17 эшҡыуар, кәсепселәр ҡорамалдар, сеймал, эш ҡоралдары һатып алыуға субсидия алды ла инде. Был маҡсатта республика бюджетынан 11 млн һум бүленде", - тине Рөстәм Афзалов. Шулай уҡ субсидия рәүешендә федераль ярҙам да бар. 2022 йылда "Ағиҙел" башҡорт художество кәсептәре предприятиеһы был ярҙам менән ҡулланды. Былтырҙан алып федераль субсидияны интернет магазиндар булдырыу һәм яңыртыу, реклама, күргәҙмә һәм сауҙа киңлеген киңәйтеү һәм модернизациялауға тотонорға була.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓12 июндә, Рәсәй һәм Өфө көнөндә, Башҡортостандың баш ҡалаһында байрам салюты була. Төнгө сәғәт 11-ҙә ҡала Советында башлана, тип хәбәр итә Өфө хакимиәте матбуғат хеҙмәтенең ТГ-каналы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, байрам уңайынан республика халҡы 10, 11 һәм 12 июндә ял итә.

✓Өфөнөң "Көньяҡ-5" һәм "Төньяҡ-2" зыяраттарында махсус хәрби операцияла һәләк булған яугирҙарҙы ерләү өсөн почетлы кварталдар булдырыла. Ҡала Советы депутаттары ритуал хеҙмәттәр тураһында положениеға тейешле төҙәтмәләр индерҙе. Был турала ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сергей Кожевников белдерҙе. "Проектта "Көньяҡ 5", "Төньяҡ 2" зыяраттарында, махсус статус беркетеп, хәрби ҡәберлектәр өсөн почетлы кварталдар ойоштороға тәҡдим ителә", - тип хәбәр итте ул. Һәләк булған хәрбиҙәрҙе ошо почетлы кварталдарҙа ерләү өсөн Өфө мэрының рөхсәте кәрәк.

✓"Өфө" аэропортында йәнә ғибәҙәт ҡылыу бүлмәләре асылды. Баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 1-се терминалда (эске авиалиниялар) ремонт эштәренән һуң Ислам һәм православие динен тотоусылар өсөн дини ғәмәлдәрҙе үтәү өсөн шарттар булдырылған. Ғибәҙәт ҡылыу бүлмәләре терминалдың икенсе ҡатында, В секторы янында урынлашҡан, тәүлек әйләнәһенә эшләй.

✓Azur Air авиакомпанияһы бер юлы ике йүнәлеш буйынса Төркиә курорттарына осоштар программаһын киңәйтә. Мәҫәлән, 6 июндән Бодрумға һәм Антальяға чартер программалары башланды. Өфө аэропортының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Бодрумға рейстар 10 көнгә бер тапҡыр 238 урынлыҡ уңайлы Boeing 757-200 самолеттарында башҡарыла. Антальяға осоу өсөн иһә аҙнаһына өс тапҡыр 336 пассажирға иҫәпләнгән Boeing 767-300 һауа суднолары йәлеп ителә. Антальяға "Аэрофлот", Red Wings, Corendon Airlines һәм Southwind Airlines авиакомпаниялары ла осоштар башҡара.

✓Рәсәй Гидрометүҙәге мәғлүмәттәре буйынса, июндә Башҡортостанда йылы булыуы көтөлә. Уртаса айлыҡ һауа температураһы норманан 1° юғарыраҡ (уртаса айлыҡ температура нормаһы +17,4°), айлыҡ яуым-төшөм нормаға ярашлы (норма 50-70 мм) булыр тип фаразлана.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҺӨЙӨНСӨ!

# "ӘР-РӘХИМ" ЙӘМИҒ МӘСЕТЕ ТӨҘӨЛӘСӘК!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың күрһәтмәһе буйынса "Әр-Рәхим" йәмиғ мәсете төҙөлөшө тергеҙелде. Республиканың төҙөлөш һәм архитектура министры вазифаһын башҡарыусы Ридаль Сәйетов белдереүенсә, 2007 йылда төҙөлә башлаған дини ҡоролманың проект-смета документацияһына һуңынан бик күп үҙгәрештәр индерелә, ахырҙа, эш туҡтатылып ҡуйыла. Әлеге ваҡытта территория төҙөкләндерелә, майҙан кәртәләнә, барыһы ла стандарттарға тап килтерелә.**



"Сит ил ҡорамалдарын ватан етештереүсеһенекенә алмаштырыуға бәйле техник мәсьәләләр бар. Бөгөн тағы ла проект-смета документацияһы үҙгәртелә, уға өҫтәмә рәүештә дәүләт экспертизаһы үткәреләсәк. Контракттың тулы хаҡы асыҡланғас, төҙөлөштө өҫтәмә финанслау мәсьәләһен ҡараясаҡбыҙ", - ти министр. Мәғлүм булыуынса, бюджеттан аҡса бүленмәйәсәк, ә меценаттар хәйриә ярҙамы күрһәтәсәк.

"Төҙөлөш тармағында беҙҙең лайыҡлы коллегаларыбыҙ бар, улар бизнеста ла уңышлы, илдең һәм республиканың патриоттары. Улар шәхсән финанс менән ярҙам итергә әҙер, шулай уҡ Башҡортостан халҡы араһында ла мәсет төҙөлөшөнә үҙ өлөшөн индерергә теләүселәр күп. Төҙөлөштө мөмкин тиклем ҡыҫҡа ваҡытта тамамларға тырышасаҡбыҙ һәм "Әр-Рәхим" мәсете республика халҡын һәм килгән ҡунаҡтарҙы ҡыуандырыр, тип өмөтләнәбеҙ", - тип һыҙыҡ өҫтөнә ала Ридаль Сәйетов.

Йәмиғ мәсетенә иғтибар 13 мартта көслө ел һөҙөмтәһендә унын манараһының осо - үләме ҡолап төшкәс артты. Әле "Грант" инженер үҙәге яны конструкция эшләгән. Ошо көндәрҙә уны төҙөлөш майҙанына алып килеп урынлаштырыу күҙаллана. Шулай уҡ башҡа үләмдәр ныҡлыҡҡа тикшерелгән һәм уларҙың ныҡ тороуы асыҡланған.

Тағы ла бер ҡыуаныслы яңылыҡ - артабан һәр йома "Әр-Рәхим" мәсетендә аҙан яңғыраясаҡ. "Тимәк, арабыҙҙа ҡара көстәр аҙыраҡ буласаҡ. Аҙан - ул изге йола һәм йышыраҡ яңғырарға тейеш. Йома намаҙы төш мәлендә үтә, уны ишетеү күптәр өсөн рәхәт булыр, - ти Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты мөфтөйө Айнур Бирғәлин һәм тиҙ арала мәсеттең төҙөлөп бөтөрөнә ышаныс белдерә. - Күптәр минән, мәсет ҡасан төҙөлөп бөтөр, тип һорай. Ҡасан беҙ уға лайыҡлы булабыҙ - шунда төҙөлөш тамамланыр. Беҙҙең дөйөм бурыс - мәсет төҙөлөшөнә мөмкин тиклем үҙ өлөшөбөҙҙө индереү".

Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев яңы ғына мәсет территорияһында һаҡ та, ҡойма ла булмауы, төҙөлөш тә бармауын билдәләп, бөгөн бөтөнләй икенсе күренеш күҙәтелеүен һыҙыҡ өҫтөнә ала. "Көстәрҙе берләштереп, Республика Башлығы ҡуйған бурысты үтәрбеҙ, тип ышанам. Өфө барлыҡ халыҡ ғорурланырлыҡ тағы ла бер матур объектҡа эйә буласаҡ", - ти ул.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

ИҒТИБАР!

# БАЙРАМ БЕҘҘӘ, БАЙРАМ!

**(Башы 1-се биттә).**

Ленин урамы, 9/11 адресындағы йорт эргәһендәге скверҙа Өфө городовойына ҡуйылған һәйкәл янында Өфө ҡалаһы тарихы музейы урынлашасаҡ. Ул урам "Өфөнә геологик тикшереү тарихы" һәм "XIX быуатта Өфө ҡалаһы башлыҡтары" темаларына урам лекторийы ойоштораcаҡ. В.И. Лениндың йорт-музейы ҡаурый ҡәләм менән яҙыу буйынса оҫталыҡ дәресе үткәрә, ә Башҡортостандың Милли музейы совет фильмдарындағы бейеүҙәр хәрәкәтен башҡарырға өйрәтәсәк.

Ҡаланың китапхана системалары ла үҙ майҙансыҡтарын булдырасаҡ. Китап күргәҙмәләренән тыш, улар ижади лабораториялар, викториналар, оҫталыҡ дәрестәре, "Өс байрам көнө" квизын, "Мин Өфөлә йәшәйем" асфальтҡа һүрәт төшөрөү буйынса балалар конкурсын һәм башҡа саралар ойоштораcаҡ.

"Родина" кинотеатры алдында "Театраль Өфө" майҙанында ҡаланың театр коллективтары сәхнәләштерелгән тамашалар тәҡдим итә. Унда Өфөнөң Йәш тамашасы, Мостай Кәрим исемендәге БР Милли йәштәр театры, Өфө балалар филармонияһы, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры сығыш яһаясаҡ.

Главпочтамтҡа тиклем Ленин урамы үҙенсәлекле фиҙаҡәрлек һәм дан проспектына әүереләсәк - бында ҡала округы райондары үҙ ҡаҙаныштарын күрһәтәсәк. Улар тарихтың мөһим осорҙары, хеҙмәт династиялары, Өфөнөң үҫешенә ҙур өлөш индергән төп предприятиелар менән таныштырасаҡ.

"Башҡортостан" дәүләт концерт залы алдындағы майҙанды студенттар биләйәсәк. Юғары һәм урта уҡыу йорттары һөнәргә йүнәлеш биреү зоналары булдырасаҡ, студент ижади коллективтары концерт программаһы менән сығыш яһаясаҡ. Ошонда уҡ төрки халыҡтарының традицион ризығы - иң ҙур ҡыҫтыбый бешереү ҙә планлаштырыла.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

ҠЫҪҠАСА

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ УЙЫНСЫҠТАР

**Республика етәксеһе Радий Хәбиров быйыл сентябрь уртаһында Өфөнөң Совет майҙанында Рәсәйҙә етештерелгән балалар уйынсыҡтары һәм өҫтәл уйындары индустрияһының Башҡортостанда беренсе форумы уҙасағын хәбәр итте.** Форумды йыл һайын уҙғарыу планлаштырыла. "Беҙ 2023 йылдың көҙөндә Рәсәй Федерацияһында етештерелгән балалар уйынсыҡтары һәм өҫтәл уйындары индустрияһы форумын ойошторорға тигән тәҡдим менән сыҡтыҡ. Хөкүмәттән балалар уйынсыҡтары сығарған сәнәғәткә ярҙам сараларын әҙерләүҙәрен һорайым. Уйынсыҡтарҙы үҙебеҙҙә етештерергә, уйынсыҡтар аша үҙ идеологиябыҙҙы үткәрергә, илебеҙ, геройҙарыбыҙ хаҡында һөйләргә кәрәк", - тине Башҡортостан Башлығы.

✓ **Өфө хакимиәте ҡарамағындағы Дәүләт-конфессия мөнәсәбәттәре һәм дини ойошмалар менән үҙ-ара эш итеү мәсьәләләре буйынса комиссия ултырышы үтте.** Комиссия ағзалары һәм саҡырылғандар Башҡортостандың баш ҡалаһында Ҡорбан байрамына әҙерләнеү һәм уны үткәреү мәсьәләләрен тикшерҙе. Ислам календарындағы төп байрамдарҙың береһе Ураҙа ғәйетенән һуң 70 көн үткәс билдәләнә. Быйыл Ҡорбан байрамы 28 июнгә тура килә. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, баш ҡаланың 23 мәсетендә байрам намаҙҙары уҡыла. Ҡорбан салыу йолалары ике махсус майҙансыҡта: "Каруан" сауҙа комплексы һәм Төньяҡ автовокзал биләмәләрендә башҡарыла. Байрам үткәрелгән урындарҙа ветеринария хеҙмәттәренең эше ойошторола, уларҙың төп маҡсаты - ниндәйҙер сир билдәләре булған малдарҙы ҡорбан итеп салыуға юл ҡуймау. Ҡорбан байрамы иртәнге намаҙҙан башлана.

✓ **Өфө уҡыусылары йәйге каникулдарҙа аҡса эшләй аласаҡ. Уларға был йәһәттән Йәштәр мәшғүллегенә булышлыҡ итеү үҙәге ярҙамға килә.** Ведомствонан хәбәр итеүҙәренсә, ата-әсәһе ризалығы менән 14 йәштән бала эш башлай ала. Эшкә урынлашҡанда килешеү төҙөргә кәрәк. 14-16 йәшлектәрҙең эш аҙнаһы 12 сәғәттән, 16-18 йәшлектәрҙеке 17,5 сәғәттән артмаҫҡа тейеш. Ғәҙәттә, балалар мәктәптәрҙең тирә-яғын тәртипкә килтерә, шулай уҡ китапхана һәм мәктәп ашханаһында ла эш табырға мөмкиндәр. Бынан тыш, балиғ булмағандарға курьер, аттракциондар операторы, промоутер урындары тәҡдим ителә. "Мәктәптәр һәм мәғариф идаралығы менән килешеү төҙөгәс, 2023 йылда был маҡсатҡа 5130 уҡыусыға иҫәпләнгән 10,3 млн һум аҡса бүленгән. Эш көнө өсөн балалар уртаса 400 һум аласаҡ. Эш биреүсе түләгәндән тыш, уларға мәшғүллек үҙәгенән 1725-тән 2500 һумға тиклем матди ярҙам бүленә. Былар мәктәптәрҙә эшләүгә ҡағыла", - тип аңлаттылар Өфө Мәшғүллек үҙәгендә.

✓ **Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән республиканың ветеринария буйынса дәүләт комитетының положениеһы һәм структураһы раҫланды.** Документ рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Бынан алдараҡ был ведомствоны идаралыҡтан дәүләт комитетына үҙгәртеп ҡороу хаҡында хәбәр ителгәйне. Документта дәүләт комитетының вәкәләттәре билдәләнгән: хайуандар менән мөғәмәлә итеүгә төбәк дәүләт контроле (күҙәтеү), эйәһеҙ хайуандар менән мөғәмәлә итеү буйынса саралар ойоштороу, карантин иғлан итеү, ветеринария өлкәһендә федераль сәйәсәтте тормошҡа ашырыу һәм башҡалар. Дәүләт комитетын ике урынбаҫары булған рәйес етәкләй. Ведомствола 6 бүлек һәм территориаль бүлексәләр ҡаралған. Башҡортостан Башлығы ҡарары менән ведомствоның үҙгәртеп ҡоролоуы йәки бөтөрөлөүе ихтимал.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Йөрәк өйәнәге

❖ Тынысландырыусы үләндәрҙән арыҫлан ҡойроғо (пустырник) үләнен 4 өлөш, кипкәр үләнен, энәлек (боярышник) сәскәһен, аҡ омела үләнен, шифалы ҡыр сәйе (буквица лекарственная) үләнен, һоро гөлйемеш емештәрен 3-әр өлөш, мәтрүшәне - 2 өлөш, шифалы календула сәскәһен - 4 өлөш алырға. Әҙерләмәнең 2 ҡалағына 3 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә һәм ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Был рәүешле йөрәк өйәнәген 1 ай дауалайҙар. Бер үк ваҡытта аҙнаһына ике тапҡыр бал ҡорттары ярҙамында дауаланырға ла мөмкин. Башлағанда 1-2 бал ҡортонан (ике аҙна дауамында), шунан тағы ике аҙна 2-3 бал ҡортонан сағылырға. Уларҙы йөрәк тапҡырына ултыртырға кәрәк һәм ҡаяуын 1 минуттан 3 минутҡа тиклем түҙеп, алмай торорға. Сағылырҙан алда аллергия юҡлыҡҡа тикшереү мөһим. Ә ҡатын-ҡыҙҙарға түшкә саҡтырыу ҡәтғи тыйыла.

❖ Йөрәк өйәнәге тотҡанда, ҡан тамырҙарының тонусын күтәреү кәрәк. Был осраҡта арыҫлан ҡойроғо үләне, энәлек сәскәһе, татлы тамыр (солодка голая) тамыры, мелисса үләне, ҡомалаҡ башын 3 өлөш, ҡандала үләне (донник лекарственный), каштан (конский каштан) сәскәһен 4-әр өлөш алырға. Йыйылманың 2 ҡалағына 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 25 минут төнәтергә һәм ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Төнәтмәне 3-4 аҙна эскәндән һуң, 1 аҙна туҡтап торорға кәрәк.

## Авитаминоз

❖ Шыршы йәки ҡарағайҙың яңы ылыҫын тутыҡмай торған ҡорос бысаҡ менән ҡырҡып алырға. Һыуыҡ һыуҙа сайҡатырға һәм ваҡ ҡына итеп турарға. Шуның 4 стаканына 2-1 стакан һыуыҡ һыу ҡойоп, 2 балғалаҡ ныҡ шыйығайтылған тоҙ кислотаһы һәм 1 ҡалаҡ аш һеркәһе ҡушып әселәтергә. Даими рәүештә болғатып тороп, 3 көн ҡараңғы урында төнәтергә. Авитаминоз булғанда һөҙөргә һәм көнөнә 1-әр стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләнә.**

***✓ Яҡшы малайҙар көслө була, улар әсәйҙе һәм ҡыҙҙарҙы яҡлай, тыңлашалар, көн һайын тештәрен йыуалар. Ә ҡыҙҙар һәйбәт булырға, матур кейенергә, әсәйгә һауыт-һаба йыуырға, ашарға бешерергә ярҙам итергә тейеш.***



## ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны билдәһеҙ. Оҙонлоғо 36 см, өҫкө киңлеге 16 см, аҫҡы киңлеге 31 см, ауырлығы 931,6г. Биҙәүестә барлығы 274 элемент. Шуларҙың 63-ө - көмөш.



**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны - Аҡкужа ауылы. Оҙонлоғо 41 см, өҫкө киңлеге 20 см, аҫҡы киңлеге 30,5 см, ауырлығы 1107,0 г. Биҙәүестә барлығы 274 элемент. Шуларҙың 127-һе - көмөш.



**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны - Сәфәр ауылы. Оҙонлоғо 43 см, өҫкө киңлеге 25 см, аҫҡы киңлеге 31 см.



**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

## БАЛАЛАР ҠОРО

# "БЕҘ БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШӘСӘКБЕҘ!"

**(Башы 1-се биттә).**

**➔ Балалар, һөйләшеүҙе бик мөһим һәм гәҙәти һорауҙан башлап китәйек әле: һеҙгә балалар баҡсаһы оҡшаймы, бында нимәләргә өйрәтәләр?**

**Әмир:** Балалар баҡсаһында минә Роберт, Аҫҡар һәм Сабир исемле дуҫтарым менән бергә уйнау оҡшай. Беҙ урамға сығабыҙ, матур яҙырға өйрәнәбеҙ, һүрәт төшөрәбеҙ, уйнайбыҙ. Балалар баҡсаһында өйрәнгәндәрҙән диванда сальто эшләү, йога, "Оҫта ҡулдар" тигән түңәрәктәргә йөрөйөм. "Оҫта ҡулдар"ҙа беҙ әсәйҙәргә бүләккә төрлө әйберҙәр эшләргә өйрәнәбеҙ. Тағы ла һүрәт төшөрөү, робот техникаһы буйынса ла түңәрәктәр бар.

**Элина:** Балалар баҡсаһына йөрөгән саҡта бында минә дуҫтар менән бергә ваҡыт үткәреүе, йога, шахмат, һүрәт төшөрөү түңәрәктәренә йөрөү, тәрбиәселәр оҡшай торғайны. Улар яҙырға, һөйләшергә, уҡырға өйрәтәләр. Хәҙер ҙә шуға әсәйемә эйәреп, уның ошондағы эшенә килергә, бында ваҡыт үткәрергә яратам. Тик дәрестәрҙән буш ваҡыт һирәк була.

**Рөстәм:** Балалар баҡсаһын мин дә бик яратам ул, тик йоҡларға ғына яратмайым. Яңыраҡ беҙҙең сығарылыш кисәһе үткәрелде, шуға хәҙер балалар баҡсаһында уйынсыҡтарыбыҙ юҡ. Пазлдар йыйыуы бик оҡшай торғайны. Шахмат түңәрәген бик яратам, һүрәт төшөрөүгә, робот техникаһы, йогаға ла йөрөйөм. Робот техникаһын өйрәнгәндә пазлдарҙан төрлө роботтар, машиналар төҙөйбөҙ.

**Мәрйәм:** Ә мин күңелле төштәр күреп йоҡлайым. Бында гимнастикаға йөрөйөм, унда тәгәрмәс эшләйем, шпагатҡа ултырам. Баяғы Әмир әйткән түңәрәктәрҙе лә беләм, пластилиндан төрлө фигуралар эшләргә өйрәндем.

**➔ Арағыҙҙа берегеҙ мәктәптә уҡый, башҡалар быйыл беренсе класҡа барасаҡ. Балалар баҡсаһында саҡ ҡына оҙағыраҡ ҡалып торорға теләмәйһегеҙме?**

**Әмир:** Юҡ, мин бында тиҙерәк эштәрҙе бөтөрөп, өлкән булғым килә. Мәктәпкә барһаң, өлкән булаһың.

**Рөстәм:** Беҙгә тағы дүрт аҙна ғына йөрөргә ҡалды, унан һуң ял иткәс, мәктәпкә барабыҙ. Унда машина йөрөтөргә лә өйрәтәләр, мин шуны көтәм.

**Мәрйәм:** Бөтәбеҙҙең дә тиҙерәк мәктәпкә барғыһы килә. Унда уҡытыусыларыбыҙ яҡшы булыуын, гел "бишле"ләр алырға теләйем. Хатта аҙаҡ йоҡлағым да килмәй, мәктәпкә генә барырға ине.

**Элина:** Мөмкин булһа, балалар баҡсаһына киренән йөрөй башлар инем. Сөнки мәктәптә оҙаҡ ултырып уҡырға, аҙаҡ дәрестәр әҙерләргә кәрәк. Ә балалар баҡсаһында рәхәт, йоҡо ла туя.

**➔ Күптән түгел Балалар көнө булды бит әле. Һеҙ был байрамда ниҙәр эшләнегеҙ?**

**Элина:** Әсәйем бүләк бирҙе һәм мин көнө буйы уйнаным.

**Әмир:** Туңдырма ашаным, һағыҙ сәйнәнем.

**Мәрйәм:** Беҙ Димдәге паркка барҙыҡ. Ул элегерәк матур түгел ине, ә хәҙер уны тәҙекләндерҙеләр һәм ул яҡшырып китте. Ул паркта бөтә нәмә ағастан. Арҡан, батут, самокат һәм велосипедтарҙа йөрөй торған урын, бәүелсәк бар.

**Рөстәм:** Эйе, унда "үрмәксе ауы"на менеп була. Мин паркта самокат менән сальто эшләргә өйрәнә башланым.

**Элина:** Был парк минә лә оҡшай ул. Самокатта йөрөргә, бәүелсәктә бәүелергә, йүгереп уйнарға, асфальтта аҡбур менән һүрәт төшөрөргә яратам.

**➔ Әйткәндәй, ә Өфө ҡалаһында һеҙгә нимә оҡшай, нимә оҡшамай?**

**Рөстәм:** Магазиндар, уйын бүлмәләре, тауҙар оҡшай минә.

**Әмир:** Миңә лә шулар оҡшай, тағы ла уйынсыҡтар һәм тәмлекәстәр магазинын өҫтәп әйтергә була. Ә бына йәшенләп күп итеп ямғыр яуыуы оҡшамай. Бер саҡ ямғыр аҫтында һыуланып ҡайттым.

**Мәрйәм:** Эйе, бер ямғыр бөтөп, икенсеһе башланып тик тороуы минә лә оҡшамай. Тағы ла ҡайҙалыр һуңлап ҡалыуыбыҙ оҡшамай. Ә Салауат Юлаев һәйкәле, шунда йөрөү, тыуған көндәр өсөн уйын бүлмәләре оҡшай.

**Элина:** Салауат Юлаев һәм Шайморатов генерал һәйкәлдәренә, "Ете ҡыҙ" фонтанына барырға яратам. Өфөлә минә оҡшамаған урын юҡ та ул.

**➔ Йәйҙе Өфөлә үткәрәһегеҙме?**

**Мәрйәм:** Тиҙҙән мин Межгорье ҡалаһына өләсәй, олатай һәм ике туған бәләкәй ҡустыларыма ҡайтам. Унда мин сәскәләремә, емеш-еләккә һыу ҡоям.

**Элина:** Ә мин Ҡуян ауылына өләсәйем һәм олатайым, инәйемдәргә ҡайтам. Ауылда ла, ҡалала ла йәйгеһен рәхәт инде ул. Ауылда өләсәйҙәргә ярҙам итәм, дуҫтарым һәм туғандарым менән күмәкләп йыйылышып, урамда уйнайбыҙ, һыу инәбеҙ һәм ваҡыт үткәне һиҙелмәй ҙә ҡала.

**Рөстәм:** Мин нәнәй менән ҡартатайға Үрнәк ауылына ҡайтам. Ауылда һыйырҙарҙы көтөүҙән ҡаршылайым, утын ташыйым. Баҡсала емешеләк бешһә, шуны йыйырға ярҙам итәм. Ә ҡалала булғанда йорт эргәһендәге майҙансыҡта футбол уйнарға сығам.

**Әмир:** Мин дә өләсәй-олатайға ҡайтам һәм гел ярҙам итәм: мунса яғырға утын ташышам, картуф утайым, һыйырҙарҙы ла баҡсалағы уныштты тапап бөтмәһендәр тип ҡыуып йөрөтәм. Өләсәйем еләк йыя ла, беҙ ашайбыҙ, ҡалғанынан ул туңдырма яһай.

**➔ Үҙегеҙҙе ҡасан бәхетле итеп тояһығыҙ?**

**Әмир:** Мин Еңеү көнөндә бәхетле.

**Рөстәм:** Балалар баҡсаһындағы ярыштарҙа еңгән саҡта бәхетлемен.

**Мәрйәм:** Еңеү көнөндә, байрам булғанда һәм миңә бүләк бирһәләр шатмын.

**Элина:** Өйҙә һәм донъяла тыныслыҡ булғанда, һуғыш булмағанда - мин бәхетле.

**➔ Ә батыр ниндәй була?**

**Рөстәм:** Салауат Юлаев кеүек, ул һаҡлаусы. Батыр бер нәмәнән дә ҡурҡмай, хәрбиҙәр кеүек беҙҙе яҡлай.

**Мәрйәм:** Батыр көслө була, ҡалабыҙҙы һаҡлай. Ул бөтәһенән дә яҡшыраҡ һәм һәйбәт кеше.

**➔ Яҡшы малай һәм ҡыҙ ниндәй булырға тейеш?**

**Рөстәм:** Яҡшы малай әсәһенә ярҙам итә, тыңлаулы, алма йыйыша, яҡшы уҡый, бөтә әйткәндәрҙе үтәй. Ҡартатай арыһа, уға ла ярҙам итә.

**Әмир:** Көс йыйырға, нимәлер эшләргә һәм буш ятмаҫҡа тейеш яҡшы малай. Мәҫәлән, һүрәт төшөрһән. Картуф ултыртырға, ҡурай еләге йыйырға, иҙән йыуырға һәм саң һөртөргә лә ярҙам итә ул. Әсәй арыһа, уға һәр саҡ ярҙам итергә тейешбеҙ. Ә яҡшы ҡыҙҙарҙың сәстәрен әсәйҙәре матур итеп үреп ҡуя, улар үҙҙәре лә, ҡыҙҙәре лә матур булырға тейеш.

**Мәрйәм:** Яҡшы малайҙар көслө була, улар әсәйҙе һәм ҡыҙҙарҙы яҡлай, тыңлашалар, көн һайын тештәрен йыуалар. Ә ҡыҙҙар һәйбәт булырға, матур кейенергә, әсәйгә һауыт-һаба йыуырға, ашарға бешерергә ярҙам итергә, ул ауырығанда дарыуҙар алып килеп бирергә тейеш.

**Элина:** "Бишле" билдәләре алырға, үсекләшмәҫкә, сәстән тартмаҫҡа тейеш яҡшы малайҙар. Ә яҡшы ҡыҙ атай-әсәйҙе тыңлай, һауыт-һаба, иҙән йыуа, сүпте сығара, таҙалыҡ ярата.

**➔ Нимә эшләргә ярай һәм ярамай, нисек уйлайһығыҙ?**

**Рөстәм:** Йәнлектәрҙе үлтерергә, бесәй менән этте туҡмарға ярамай. Әсәй, атай, олатай һәм өләсәйҙе ярата, хөрмәт итергә кәрәк.

**Әмир:** Ҡурҡыныс киноларҙы, йәнһүрәттәрҙе ҡарарға, уйындар уйнарға ярамай.

**Элина:** Тәбиғәтте яратырға кәрәк, әололар менән телләшергә, башҡалар менән һуғышырға ярамай.

**Мәрйәм:** Урманда сүп-сар ҡалдырырға, ағас ҡыркырға ярамай, ул матур булып үҫергә тейеш. Әсәйгә ауыр һүҙ әйтмәҫкә кәрәк.

**Әмир:** Урманда бер үҙең алыҫҡа йүгереп китергә лә ярамай, атыу әсәй "Минең улым ҡайҙа икән?" тип иласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баш ҡала балалары менән бына ошондай матур һөйләшеүҙәрҙән һуң киләсәгебеҙ өсөн борсолоуҙар урынһыҙ булыуына инанаһың. Сөнки атайәсәйҙәре һәм милли мәғариф учреждениеларындағы рухлы, аңлы, алдынғы ҡарашлы хеҙмәткәрҙәр ярҙамында улар оло тормош юлын яҙлыкмайынса үтер дөрөҫ йүнәлеш алып үҫә. Быны бер тауыштан "Беҙ башҡортса һөйләшеп йөрөйәсәкбеҙ!" тип яуаплауҙарында ла тойорға мөмкин. Һоҡланғандан һоҡ тейеп ҡуймаһын Өфө һәм Башҡортостандың киләсәген төҙөйәсәк кескәйҙәргә!**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Дүртенсе бүлек. Көньяҡ Урал гун эпохаһында



### Дала зонаһы күскенселәре. Юэчжи

Ерләгәндә табут ҡуллана башлау осраҡтары, бар урындарҙа ла баш һөйәген деформациялау йолаһының таралыуы аныҡ теркәлгән, был быныдағы мәҙәниәттең яңы элементтарын хасил итә. Уларҙың үтеп инеү юлдары беленеп тора: ошо төбәктә гун-усунь ҡәбиләләре менән бер территорияла оҙаҡ ваҡыт дауамында аралашып йәшәү ҡатнаш никахтар өсөн шарттар булдыра.

Һөйләш телендә лә сифатлы үҙгәрештәр бара (Үҙәк Азияның төрки элементтары көсәйә). Күршеләренең төрки һүҙҙәрен үҙләштереү ҡағиҙәгә ярашлы ла, маҡтаулы ла булып иҫәпләнә башлай: урындағы ҡәбиләләр араһында һун-усундәр хакимлыҡ итеүселәр хәлендә була.

Шулай итеп, беҙҙең эра сиктәре эпохаһы һәм уның тәүге быуаттары Көньяҡ Уралдың һун һәм усундәрҙең сәйәси берләшмәләре составына инеүе менән билдәләнә, һәм бында иң мөһимдәр иҫәбендә Кангюй дәүләтен атарға була. Мәҙәниәттәренең яҡын булыуы, шулай уҡ яҙма сығанаҡтарҙа Кангюйға яһаҡ түләү факты ошо дәүерҙәге Көньяҡ Уралдың был үтә ҙур дәүләт составында булыуына дәлил.

Үрҙә яҙылғандар менән бәйләп, Ҡытай авторҙарының Кангюйҙың дәүләт төҙөлөшө хаҡындағы бер мәғлүмәте уҡыусыбыҙ иғтибарын йәлеп итерлек булыр, тип әйтергә кәрәк. Был сығанаҡта Кангюйҙа 5 кесе кенәз булып, уларҙың барыһының да үҙәк идарасы - Кангюй хакимына буйһоноуы хаҡында һүҙ бара. Кангюй өсөн Көньяҡ Уралдың иҡтисади яҡтан мөһим төбәк булыуын иҫәпкә алһаҡ, биш провинция кенәздәренең береһенең тап ошонда йәшәүе хаҡында фараз итеп була. Был ошо ныҡ үҫешкән һәм көслө дәүләткә хас булған төп ижтимағи институттарҙың (халыҡ ҡатламдарының) Көньяҡ Урал ҡәбиләләре йәмғиәтендә лә хасил булыуына дәлил.

Юл ыңғайы күптән түгел "Российская археология" журналы биттәрендә башланған бер дискуссия буйынса үҙ фекеребеҙҙе белдереү урынлы булыр, тип иҫәпләйбеҙ. Быға С. Г. Боталовтың һәм С. Ю. Гуцаловтың "Гунно-сарматы Урало-казахстанских степей" тип аталған китабының баҫылып сығыуы сәбәп булды. Авторҙар ошо китапта Көньяҡ Урал төбәгенең беҙҙең эраның беренсе быуаттарына ҡараған археологик ҡомартҡылары материалдары составына ентекле анализ биреү һәм яҙма сығанаҡтар мәғлүмәттәре нигеҙендә Урал-Волга буйы территорияһында ошо дәүерҙә гундарҙың - Үҙәк Азия далаларынан сыҡҡан ҡәүемдең - өҫтөнлөк иткән этносәйәси көс булыуы хаҡында һығымта яһай. Әле аталған китаптың контексында Урал-Волга буйы күскенселәре ҡомартҡыларын гун-сармат тарихи-мәҙәни комплексы ҡомартҡылары, тип атау маҡсатҡа ярашлы тигән идея төҫмөрләнә. Дискуссия инициаторҙары XX быуат башынан бирле үҙгәрмәйенсә ҡалған "һуң сарматтар" ("поздние сарматы"), йә иһә сармат мәҙәниәте төшөнсәләрен үҙгәртмәй ҡалдырыуҙы талап итә. Беҙ Көньяҡ Уралдың иртә күскенселәре тарихына өҫтәрәк яһаған экскурс боронғо дәүер эпохаһын өйрәнеүсе бер генә авторҙың да әле ҡаралған территорияла б.э. тиклем IV-II быуаттарҙа сарматтарҙы ла, уларҙың б.э. тиклем VII-V быуаттарҙа йәшәгән яҡын ата-бабалары булған савроматтарҙы ла иҫкә алмауын күрһәтә; уларҙың төйәге итеп Азов буйы далалары атала. Савромат, сармат төшөнсәләре һәм ошо исемдәге археологик мәҙәниәттәр Көньяҡ Уралға ошоғаса йыйылған ҙур күләмле материалдарҙы беренсел тикшереү һәм системалаштырыу этабында механик рәүештә күсерелә, ә уларҙың ваҡыты һәм этник яҡтан кемдәрҙеке булыуы ошо теманы өйрәнеүсе корифейҙарыбыҙ М. И. Ростовцев, К. Ф. Смирнов, М. Г. Мошкова хеҙмәттәренә таянып билдәләнә. Әммә Көньяҡ Уралдың иртә күскенселәре мәҙәниәте үҙенсәлекле, ул гун-сак-дах-массагет, һуңынан гун-кангюй ҡәбиләләренең әүҙем йоғонтоһо шарттарында үҫеш ала. Шуныһы ҡыҙыҡлы, К.Ф. Смирнов ошо теманы йомғаҡлаусы һуңғы хеҙмәттәренең береһендә иртә тимер быуаты осорондағы Көньяҡ Уралда яҙма сығанаҡтар аша билдәле булған ҡәбиләләр араһында савроматтарҙы ла, сарматтарҙы ла иҫкә алмай. Ошо проблеманы асыҡлаусы барса материалдар нигеҙендә бөтөн донъяға билдәле булған Филиппов ҡурғандарын сарматтарҙыҡы, ә уларҙан ҡаҙып алынған уникаль табыштар коллекцияһын сармат хазинаһы йә иһә "сармат алтыны" тип атау факты ниндәйҙер аңлашмаусанлыҡ булып ҡабул ителә. 2008 йылдың апрелендә Ырымбур ҡалаһында булып уҙған Халыҡ-ара фәнни конференцияла ҡатнашыусылар Көньяҡ Уралдың күскенсе ҡәбиләләрен савромат, сармат (савромат мәҙәниәте, сармат мәҙәниәте) төшөнсәләре менән бәйләү өсөн дәлилдәр булмауын бер тауыштан танырға мәжбүр булды. Ошо конференцияла артабан Урал буйының Филипповка һәм Прохоровка тибындағы ҡомартҡыларын прохоровка мәҙәниәте, тип атау хаҡында ҡарар ҡабул ителде.



18-се һүрәт. Беҙҙең эраның тәүге быуаттарында Көньяҡ Урал күскенселәре ҡурғандары материалдары: 1,2 - гун тибындағы бронза ҡаҙандар; 3 - ҡойоп яһалған Ҡытай көҙгөһө; 4 - балсыҡ һауыт



19-сы һүрәт. II - III быуаттарҙағы Темәс ҡурғаны материалдары: 1,2 - уҡ башаҡтары; 3,4, 10 - фибулалар; 5-6 - балдаҡтар; 7 - балсыҡ кәсә; 9,11 - һырғалар.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

МУЗЕЙ ҠОМАРТҠЫҺЫ

# ӨФӨНӨҢ БИЛӘМӘҺЕНДӘ...

**Өфө биләмәһендә археологик ҡомартҡылар бихисап. Бөгөнгө көндә 102 ҡомартҡы билдәле. Улар араһында - боронғо туҡталҡа, ҡәберлек һәм башҡалар. Ҡыҙғанысҡа күрә, улар бик әҙ өйрәнелгән һәм күпселеге ҡала үҫкән ваҡытта, XVII быуаттан алып XX быуат баштарына тиклем, өлөшләтә йәки бөтөнләй юҡҡа сыҡҡан.**

1936 йылдың йәйендә Башҡорт дәүләт медицина университеты корпусын (Ленин урамы, 3) төҙөгән ваҡытта 1,9 метр тәрәнлектә ир, ҡатын-ҡыҙ һәм бала ерләнгән өс ҡәберлек табылған. Бында 30-32 йәшлек ҡатын-ҡыҙ ерләнгән ҡәберҙә табылған әйберҙәр иң күбе: баш һәм өҫ кейемдәре, алтын медальондар һәм колт (баш кейеменә ҡуйылған биҙәүес), алтын йөҙөктәр һәм башҡалар.

Табылған уникаль ювелир әйберҙәр VI быуаттың беренсе яртыһы - VI быуаттың беренсе яртыһына ҡарай, тикшереүселәр билдәләүенсә улар Византия ювелир оҫтаханаһында эшләнгән, юстиниан йәки унан һуңғы осорға ҡарауы мөмкин. Юстиниан императоры идаралыҡ иткән осорҙа Византия хәҙерге Башҡортостан биләмәһенә киткән ҡәбиләләр менән тығыҙ бәйләнештә булған. Ул ҡәбиләләр, археологтар тарафынан "Турбаслы мәҙәниәте" итеп билдәләнелә.

Ҡомартҡылар Башҡортостан Милли музейының "Ҡиммәтле металдар" фондында һаҡлана.



Фотола - медальондар һәм колт.

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Шайморатовсылар - Гомель-Речица операцияһында

60-сы гв. атлы полкы ауылдың көнбайыш яғынан дошман тылына сыға, бында немецтарҙың ике ауыр миномет батареяһына юлыға. 58-се гв. атлы полкы ауылдың көнсығыш ҡырыйынан һөжүм итә, әммә бында дошмандың мина яланына тап була. Асыҡ ергә сыҡҡан яугирҙарҙы немецтар пулемет уты менән ҡаршылай. Төнөн саперҙар мина яланында үҙ эштәрен башҡара - атакаға барыр өсөн миналарҙан таҙартылған үтеү урындары эшләнә. Таң атыуға 58-се һәм 60-сы гв. атлы полктары дошманды ике яҡтан бер юлы атакалай, ҡыҫҡа ғына алышта уның 8 ауыр минометы ҡулға төшөрөлә, 100-ҙән ашыу һалдаты әсиргә алына. Әммә немец командованиеһы Защебье терәк пуктын бер нисек тә юғалтырға теләмәй: был осраҡта дошман частары өсөн үтә мөһим булған тимер юлы менән бергә Калинковичи - Хойники шоссе юлы киҫелә. Шулай уҡ дошмандың Гомель төркөмөнөң сигенеү юлы ла ябыла. Защебье ауылына немец авиацияһы бомбалар яуҙыра башлай, уның йыраҡтан атыусы артиллерияһы ла беҙҙең яугирҙар биләгән позицияларҙы утҡа тота. Василевичи ауылы яғынан автоматсылар менән тулы автомашиналар пәйҙә була, алыш ҡыҙғандан-ҡыҙа бара. Был осраҡта Защебьела ҡалыу беҙҙең частарҙы ҙур юғалтыуҙарға дусар итер ине, шуға күрә улар ауылды ҡалдырып китә. Әммә беҙҙең полктар барыбер Калинковичи - Хойники шоссе юлының бер өлөшөн үҙ ҡарамағында тота, бынан дошман техникаһы үтә алмай. Килеп тыуған ауыр хәлдә дивизия штабы 58-се һәм 60-сы полктарға ярҙамға 148-се артиллерия-миномет полкынан гв. өлкән лейтенанты Мөғин Нагаевтың һәм гв. капитаны Ситдыҡ Сәғитовтың артиллерия һәм миномет батареяларын ебәрә.

Беҙҙең 62-се гв. атлы полкы ла ауыр хәлдә ҡала. Головки ауылы яғынан немецтарҙың бер батальон автоматсылары һәм 10 танкы һөжүм итә. Дошман танкылары яугирҙар ПТР мылтыҡтарынан ут аса, беҙҙең автоматсылар ротаһы Защебье ауылына алып барған юлды киҫеүгә өлгәшә. 62-се гв. атлы полкының барса эскадрондары Головки ауылын алыр өсөн алышҡа инә. Шул уҡ ваҡытта дошмандың 2 пехота батальоны, 12 танк артына ышыҡланып килеп, 58-се һәм 60-сы полктар биләгән позицияларға һөжүм итә. Алыш аяуһыҙ төҫ ала. Гвардиясылар, ике тәүлек дауамында дошман атакаларын кире ҡағып, уны күп юғалтыуҙарға дусар итә.

58-се гв. атлы полкының 4-се эскадроны взводына дошмандың бер юлы 5 танкыһы яҡынлаша, улар көслө ут аса, снаряд ярсығынан взвод командиры һәләк була. Ҡайһы бер ҡаушап ҡалған атлылар, окоптарынан сығып, артҡа сигенә башлай. Шул хәл иткес мәлдә гв. рядовойы В.А. Кисиков яуҙаштарына оран һала: "Минең команданы үтәгеҙ! Окоптарҙан сыҡмаҫҡа! Дошманға ут асырға әҙерләнегеҙ!" Инде күп яуҙарҙа һыналған батыр яугирҙың һүҙҙәре уның иптәштәрен иҫенә килтерә, улар окоптар төбөнә ятып, дошман танкыларын үткәреп ебәрә. Беҙҙең артиллерия уты аҫтына эләккән дошман танкылары туҡтап ҡала, ә арттанылраҡ килгән немец автоматсыларын яугирҙарыбыҙ көслө пулемет һәм автомат уты менән ҡаршылай. Дошман атакаһы ошолай итеп кире ҡағыла. Ошо тиңһеҙ алышта күрһәткән батырлығы өсөн гв. рядовойы В.А. Кисиков III дәрәжә Богдан Хмельницкий ордены менән бүләкләнә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Сығарылыш класында уҡыусыларға ышаныслы әйтә алам: юлдарын үҙҙәре һайлаһындар, был мәсьәләне атай-әсәйҙәр генә хәл итергә тейеш түгел. Һайлаған бүлек оҡшамаһа, уҡыу осоронда һөнәр йүнәлешен үҙгәртеү мөмкинлеге бар.*



# УҠЫРҒА... ҠАЙҘА? СИБАЙҘА!

**Уҡырға ҡайҙа барырға? Был һорау сығарылыш класс уҡыусылары өсөн генә түгел, бәләкәйерәктәре өсөн дә йыш ҡабатланырға тейеш. Сөнки кешеләр, бигерәк тә бала кешеләр, танауҙарынан йыраҡ ҡарай һалып бармай. Ә бит яраткан һөнәрең буйынса яраткан эшеңә, байрамға барғандай барып, яраткан ғаиләңә әйләнеп ҡайтыу өсөн күп кәрәкмәй - дөрөҫ йүнәлеш табып, дөрөҫ юлдан барыу етә. Тик… теләгең мөмкинлектәреңә тура киләме, хыялың зәңгәр томандар артында түгелме, тормошҡа ашҡандаймы?**
**Өфө фән һәм технологиялар университеты Сибай институтының дүрт факультетының (тәбиғи-математика, педагогика, технология һәм иҡтисад-хоҡуҡ) дүрт студенты менән осрашҡанда әле мәктәп парталары артында ултырған буласаҡ студенттарҙы ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап алғы килде.**

**Һеҙ ни өсөн Сибай институтын һайланығыҙ?**

***Айһылыу Хәйруллина, технология факультетының 3-сө курс студенты, Белорет районы Шығай ауылынан:*** Институтҡа үҙ теләгем буйынса килдем, ә мәктәптә уҡығанда ниндәй һөнәр буйынса кем булып эшләремде күҙ алдына ла килтермәнем, киләсәккә юлым билдәһеҙ ине. Башта, 11-се кластан һуң, фельдшер һөнәрен һайлап, Белорет ҡалаһындағы медицина колледжына уҡырға индем. Унда ике йыл уҡығас, Сибай медколледжына күстем. Бында өсөнсө курсҡа урын булмағас, икенсе курста яңынан уҡырға тура килде. Шулай итеп, биш йыл буйы фельдшер һөнәрен үҙләштерҙем. Диплом алһам да, был һөнәр күңелемә ятманы, үҙемде медицина хеҙмәткәре итеп бер ҙә күҙ алдына килтермәй инем. Колледжда уҡыған саҡта тормош иптәшем Сибай институтының технология факультетында белем ала ине, уның уҡыуы менән ҡыҙыҡһына башланым. Институттағы уҡыу шарттары, бигерәк тә уҡытыусылар менән студенттар араһындағы дуҫтарса мөнәсәбәттәр оҡшай ине. Улар нисектер бер-береһенә яҡын, уҡытыусылары терәк булырҙай кешеләр, һәр яҡлап ярҙам итергә әҙерҙәр. Икенсенән, был факультетта ҡул эштәренә ҙур иғтибар бүленә: тегеү, төрлө аштар бешереү буйынса күп нәмәгә өйрәнергә була, таштан, ағастан төрлө һындар һырлау ҙа күңелгә яҡын тойолдо. Шуға, институттың технология факультетын һайланым һәм ошонда уҡыуыма бик шатмын.

***Рәзилә Ғәләүетдинова, педагогика факультетының 1-се курс студенты, Баймаҡ районы Йәнйегет ауылынан:*** Бәләкәй саҡтан уҡытыусы булырға хыялландым, шуға туғыҙынсы кластан һуң, икеләнмәй, Сибай педагогия колледжына уҡырға индем. Башланғыс кластар уҡытыусыһы һөнәрен үҙләштергән саҡта башҡорт теленән уҡытҡан уҡытыусыбыҙ "Туған тел уҡытыусыһы булғығыҙ килһә, Сибай институтына барығыҙ", тип йыш ҡабатлай торғайны. Уҡытыусымды тыңлап, колледжды тамамлағас, бында уҡырға индем.

***Данил Ғәлиуллин, иҡтисад һәм хоҡуҡ факультетының 3-сө курс студенты, Өфө ҡалаһынан:*** Өфө ҡалаһының 25- се махсус мәктәбендә уҡыған саҡта уҡ үҙемә юғары квалификациялы юрист булырға тигән маҡсат ҡуйҙым һәм Берҙәм дәүләт имтихандарын ошо йүнәлеш буйынса һайланым, киләсәккә маҡсатым алдан билдәле ине. Сибай институтында уҡыу бик оҡшай, бында яҡшы белем бирәләр, практик дәрестәрҙә буласаҡ һөнәр буйынса оҫталыҡты һәм күнекмәләрҙе системалаштырабыҙ, тәжрибә туплайбыҙ. Былар киләсәктә ныҡ ярҙам итәсәк. Яҡын арала бер аҙнаға Рәсәй Дәүләт Думаһына практика үтергә барам. Унда мин пленар ултырыштарҙың эшен ҡараясаҡмын, төрлө документтар төҙөү ысулдарын өйрәнәсәкмен, юристар өсөн кәрәкле тәжрибә туплаясаҡмын. Бакалавриаттан һуң белемемде магистратурала дауам итеп, аспирантурала уҡыясаҡмын. Эш урынын диссертация яҡлағандан һуң һайлармын, тим.

***Ғәҙел Булатов, тәбиғи-математика факультетының 3-сө курс студенты, Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылынан*:** Бишенсе класҡа тиклем Баймаҡ районының Әбделкәрим ауылы мәктәбендә белем алдым, шунан Баймаҡ лицей-интернатында уҡыным. Йыл да сығарылыш класс уҡыусылары менән үткәрелгән осрашыуҙарға Сибай институтында уҡыған студенттар, элекке интернат уҡыусылары ла килә торғайны. Улар юғары уҡыу йорто тураһында һөйләп, ниндәй имтихандар бирергә, ниндәй документтар кәрәклеген аңлата инеләр. Бигерәк тә институттағы уҡыу шарттары тураһында һөйләүҙәрен ҡыҙыҡһынып тыңлай торғайным. Бер туған ағайымдың ошо уҡыу йортоноң педагогика факультетын тамамлауы ла йоғонто яһағандыр. Ул да институттағы яҡшы мөнәсәбәттәр тураһында йыш һөйләй торғайны. Бында, ысынлап та, студенттарға төрлө яҡлап ярҙам итәләр: матди яҡтан да, һүҙ ярҙамы менән дә. Мөмкинлектәр бик күп: уҡыу яғынан булһынмы, практика үтеүме - бөтәһе лә иҫәпкә алынған. Ағайым, мәҫәлән, Ҡырымға барып практика үтте, Мәскәүгә лә йыш баралар. Шуларҙы иҫәпкә алып, бында уҡырға килдем.



**Сығарылыш класс уҡыусыларына ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ?**

***Айһылыу:*** Ошо йәшемдәге тәжрибәмдән сығып, әле сығарылыш класында уҡыусыларға ышаныслы әйтә алам: үҙ юлдарын үҙҙәре һайлаһындар, был мәсьәләне атай-әсәйҙәр генә хәл итергә тейеш түгел. Әлбиттә, мөмкинлектәрҙе иҫәпкә алырға кәрәк. Мәҫәлән, бюджет яғынан. Һайлаған бүлек оҡшамаһа, хәҙер бит уҡыу осоронда уҡ һөнәр йүнәлешен үҙгәртеү мөмкинлеге бар. Йәшәү шарттары үҙгәреүҙән дә ҡурҡырға кәрәкмәй, атай-әсәйҙән ҡасан да булһа айырылаһың, шуға, киләсәкте лә уйларға кәрәк. Иң мөһиме - һәләткә ҡарап, үҙең яратҡан һөнәрҙе табыу.

***Рәзилә:*** Айһылыуҙың һүҙҙәренә ҡушылам: балалар тормош юлын үҙҙәре тапһын, күңелдәре ниндәй һөнәргә тарта, шуны һайлаһын. Атай-әсәйҙе тыңлап, улар талап иткән өлкәне һайлаһаң, аҙаҡ ул эш оҡшамаҫҡа ла мөмкин. Һәр кем үҙе теләгән ергә уҡырға инергә, яратҡан эшен башҡарырға тейеш.

***Данил:*** Киләсәккә ҡуйған маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн иң тәүҙә ниндәй предметтарҙан имтихан биреүҙе алдан билдәләп, дөрөҫ йүнәлеш буйынса барырға кәрәк. Әлбиттә, Берҙәм дәүләт имтихандарына алдан уҡ ентекле әҙерләнергә, уларҙы яҡшы билдәләргә тапшырырға кәрәк. Яҡшы билдәләр өсөн хатта ярты йыл әҙерлек тә етмәүе ихтимал.

***Ғәҙел:*** Минең уйымса, уҡыу йылдарында уҡ нимәгә һәләтле икәнеңде тойорға кәрәк: мәҫәлән, кемдер матур итеп шиғыр ятлай белә, кемдер спорт буйынса алдынғылыҡ бирмәй - һәләттәр төрлөсә була бит. Ниндәй предметтан имтихан биреүҙе ана шул һәләткә ҡарап һайлап, яҡшы билдәләргә тапшырғас, юғары уҡыу йорттарының мөмкинлектәрен иҫәпкә алыу ҙа мөһим. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тигәндәй, уларға һөнәр һайлауы еңелерәктер, тим - әйҙә, йәнең теләгән етмеш йүнәлеште һайла.

**Институтта уҡытыусылар менән студенттар, һабаҡташтар менән һабаҡташтар араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәттәр ниндәй?**

***Айһылыу:*** Социумда йәшәгәс, кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте йәшәйештең айырылғыһыҙ бер өлөшө инде. Шуға ла дөрөҫ мөғәмәлә ҡороу күп осраҡтарҙа төрлө проблемаларҙы ыңғай хәл итергә ярҙам итә. Беҙҙең факультетта, ғөмүмән, институтта ла, студенттар менән уҡытыусылар араһында, студенттар менән студенттар араһында дуҫтарса мөнәсәбәт нығынған. Әлбиттә, аралыҡ һаҡлайбыҙ, уҡытыусыларҙың дәрәжәһен, абруйын хөрмәт итәбеҙ. Был сифаттарҙың күбеһе ғаиләнән, мәктәптән, тәрбиәнән киләләр. Студент тормошонда һабаҡташтарҙың бер-береһенә мөнәсәбәте асыҡ аралашыуға бәйле булырға тейеш, үҙ эсеңә йомолорға ярамай, һәр яҡлап үҙеңде матур яҡтан күрһәтергә тырышырға кәрәк. Мәҫәлән, түбән курстағы студенттар ярҙам һораһа, ярҙам итәһең, өлкән курстарға үҙең ярҙам һорап бараһың. Факультеттар араһында ла шул уҡ мөнәсәбәттәр хөкөм һөрә. Күп нәмә шәхсән үҙеңә бәйле булһа ла, башҡаларға яҡшы мөнәсәбәттә булһаң, уларҙан да шуны көтөргә була.

***Рәзилә:*** Әгәр кешеләр менән һәйбәт һөйләшә белһәң, мөнәсәбәттәрҙе дөрөҫ ҡороу ҡыйын түгел. Миңә, мәҫәлән, баштан уҡ ауыр булманы, сөнки бында уҡырға ингәндә колледжда бергә уҡыған таныш ҡыҙҙарым бар ине. Килгәс тә улар менән аралаша башланым, таяныс таптым, ярҙамдарын тойҙом. Шунан яйлап башҡа ҡыҙҙар менән танышып һөйләшә башланым. Уҡытыусылар менән мөнәсәбәт бик яҡшы, улар итәғәтле, һәйбәт һөйләшәләр. Уҡыу буйынса ла, тормош хәлдәре буйынса ла ярҙамһыҙ ҡалдырмайҙар. Өлкән курстар менән дә мөнәсәбәттәр яҡшы, бик һәйбәт аралашабыҙ - курсовойҙар, практик семинарҙар ваҡытында ярҙам итәләр.

***Данил:*** Беренсе курс студенты тәүге көндән яңы шарттарға, таныш булмаған мөхиткә өйрәнергә тейеш. Быны өсөн иң тәүҙә башҡалар менән уртаҡ тел табырға кәрәк. Мәҫәлән, өлкән курстар күп нәмәне белә, тәжрибәләре бар - сессияларҙа имтихандар биргәндәр, практикала булғандар. Уҡытыусыларҙың таянысын тойоу ҙа ныҡ ярҙам итә.

***Ғәҙел:*** Институтта төрлө конкурстар, ярыштар була. Команда ярыштарында башҡа курстар менән танышабыҙ, шулай аралашыу яҡынлаштыра. Мин дөйөм ятаҡта йәшәйем, унда ла мөнәсәбәттәр яҡшы, комендант та, башҡа апай-инәйҙәр ҙә һәр яҡтан ярҙам итәләр.

**Яңы шарттарға нисек өйрәндегеҙ? Уҡып китеүе ҡыйын булманымы?**

***Айһылыу:*** Уҡып китеүе бер ҙә ҡыйын булманы. Мәктәптә уҡығанда күберәк

✓ **2023 йылдың мартынан Башҡортостанда яңы һөнәр үҙләштерергә, йәки өҫтәмә белем алырға теләгән МХО-ла ҡатнашыусылар өсөн сертификат биреү программаһы киңәйтелде.**



дәүләт имтихандары тураһында ҡайғырттыҡ, күп көс шуға сарыф ителә ине, ә бында программаны яйлап, ҡабаланмай, аңға һеңдереп өйрәнәбеҙ. Шуға, юғары уҡыу йортонда уҡыу оҡшай. Имтихандар, зачет, сессия, тип ҡурҡҡаным юҡ, сөнки яңылышһаң, хаталар эшләһәң, уҡытыусылар дөрөҫ юлға төшөрөп, кәрәкле йүнәлеш биреп, ярҙам итеренә ышанам. Активистар рәтендә булғас, институттың, факультеттың йөҙө булырға кәрәк - был яуаплы вазифа. Институт беҙгә төрлө яҡтан үҙебеҙҙе күрһәтергә мөмкинлек бирә - уҡыу яғынан да, спорт, мәҙәни һәм башҡа яҡтан да.

***Рәзилә:*** Институтта уҡып китергә педколледжда алған белемем ярҙам итте, күп предметтарҙы алдан белә инем. Таныш булмаған предметтарҙан, әлбиттә, ауырыраҡ булды, әммә сессияларҙы яҡшы тапшырҙым.

***Данил:*** Институттағы семинар дәрестәрендә бер нисә тема буйынса яуап бирәһең, сессия ваҡытында инде бөтөн курс буйынса контроль һорауҙарға яуап бирә белергә кәрәк. Беренсе курстағы тәүге сессияға бик етди әҙерләндем, бөтә предметтарҙан да "бишле" билдәләре алдым. Шунда уҡ аңланым: ентекле әҙерләнһәң, бөтә сессияларҙы ла яҡшы билдәләр менән тамамларға була. Тағы бер мәл: бында мин магистратураға ингәндә кәрәк буласаҡ темалар буйынса мәҡәләләр яҙам. Улар бөтәһе лә киләсәктә үҫешер өсөн ярҙам итәсәк.

***Ғәҙел:*** Мәктәптә үк информатиканан дәүләт имтиханы бирҙем, әле лә шул йүнәлеш буйынса барғас, күп темалар таныш. Уҡытыусыларҙың да ыңғай ҡараштa булыуы ярҙам итә. Дәрестәрен ҡалдырмай уҡыған студенттарға дәртләндереү балдары ҡуйыла һәм экзамен ваҡыттарында улар иҫәпкә алына. Дәрестәрҙе ҡалдырмаһаң, семинар дәрестәрендә ҡатнашһаң, имтихан биреү күпкә еңелерәк.

**Мәҙәни яҡтан үҫешеү өсөн шарттар нисек?**

***Айһылыу:*** Институтта мәҙәни яҡтан үҫешеү өсөн шарттар етерлек, хатта үҫешкән, тип әйтә алам. Бында уҡыу буйынса ғына үҫтермәйҙәр, рухи яҡтан да тәрбиәләйҙәр. Мәҫәлән, һәләтлеләр өсөн вокал түңәрәге, инструменталь, бейеү ансамблдәре бар, КВН командаһы уңышлы сығыш яһай, конферансьелар әҙерләйҙәр. Ҡаланың үҙендә лә мәҙәниәт ныҡ үҫешкән, Өфөнән ҡалышмайҙыр ул, сөнки Сибай театрҙарының, филармонияның сығыштарын сибайҙар ғына ҡарамай, уларҙы башҡа төбәктәрҙә лә яҡшы беләләр. Мәҫәлән, үҙем театрға йөрөргә яратам. Ғөмүмән, студенттарға мәҙәни яҡтан үҫешер өсөн мөмкинлектәр киң.

***Рәзилә:*** Институтта төрлө мәҙәни саралар йыш була. Мин үҙем шиғырҙар яҙам, вокал түңәрәгенә йөрөйөм, КВН ярыштарында ҡатнашам, институттағы концерттарҙа сығыш яһайым. "Уфтанма" исемле шаяндар клубы командаһында дүрт ҡыҙ сығыш яһайбыҙ. Әле Сибайҙа беренсе турҙы үтеп, финалға сыҡтыҡ, тиҙҙән Өфөгә барасаҡбыҙ. Сибайҙа ике театр, филармония бар. Мин дә театрға йыш йөрөйөм, премьераларҙы ҡалдырмай ҡарап барам.

***Данил:*** Студенттарға йәмғиәткә файҙалы булып үҫешер өсөн бөтә шарттар ҙа булдырылған, төрлө мәҙәни саралар йыш була. Миңә бигерәк тә йыл да үткәрелгән "Студент яҙы" фестивале оҡшай. Ҡаланың крайҙы өйрәнеү музейы экспонаттарға бик бай. Пушкин картаһын файҙалы ҡулланыр өсөн мөмкинлектәр бик күп, теләге булған студенттар төрлө яҡлап үҫешә.

***Ғәҙел:*** Сибай институтында уҡыған студент теләй икән бейей, йырлай, теләһә, волейбол, баскетбол уйнай. Мин үҙем - спортсы, еңел атлетика менән шөғөлләнәм, Башҡортостандың йыйылма команда составында торам, төрлө ярыштарҙа республика данын яҡлайбыҙ. Ҡазанда, Сочиҙа ярыштарҙа ҡатнаштыҡ, Ырымбурҙа бронза миҙалға лайыҡ булдым. Институтта спортсыларҙы хөрмәт итәләр, ҡала хакимиәте лә һәр саҡ ярҙам итә.

**Киләсәкте күҙ алдына килтерәһегеҙме? Диплом алғас, икенсе һөнәргә күсеп китмәҫһегеҙме?**

***Айһылыу:*** Институтты тамамларға ике йыл бар. Тормошҡа ҡараш үҙгәрә, донъя хәлен дә белеп булмай, ҡыҫҡаһы, уйларға ваҡыт бар. Әле уҡыған һөнәрем бик оҡшай, булған мөмкинлектәрҙе файҙаланырға кәрәк. Институт төрлө һөнәрҙәр үҙләштерергә мөмкинлек бирә, диплом алғас та һуңғы курста ҡайтанан квалификация үтергә була, миңә шул оҡшай. Киләсәктә үҙемде мәктәптә уҡытыусы булып та күрәм, әммә бер урында ғына туҡталып ҡалмаҫмын, тим, төрлө һөнәр үҙләштерергә тырышасаҡмын. Шулай ҙа, врачҡа ҡарағанда, уҡытыусы булараҡ үҙемде нығыраҡ күҙ алдына килтерәм, күңелемә шулай яҡыныраҡ һымаҡ, ижади мөхитте яратам. Беҙҙең факультеттың айырым музейы бар, унда институтты бөткәндәрҙең ҡул эштәре ҡуйылған, ҡарап туйғыһыҙ. Ижад шулай емешле булырға тейештер, күрәһең.

***Рәзилә:*** Киләсәгемде күҙ алдына килтерәм, институтты бөткәс, уҡытыусы булып эшләрмен, тип уйлайым, сөнки бала саҡ хыялым тормошҡа ашасаҡ. Уҡытырға, балалар менән эшләргә яратам. Башҡорт теле буйынса, йәки башланғыс кластар уҡытыусыһы булырмын, тим.

***Данил:*** Икенсе курста ҡаланың район судында практикала булдым, эске эштәр министрлығында ла булырға тура килде, шуға киләсәк һөнәремдең үҙенсәлеген, эш барышын яҡшы аңлайым. Һайлаған һөнәрем буйынса эшләрмен, юғары квалификациялы юрист булырмын, тим. Киләсәккә пландарым бик етди.

***Ғәҙел:*** Киләсәктә һайлаған йүнәлешем буйынса эшләрмен, тип күҙ алдына килтерәм. Сибай гимназияһында практика үткәндә эшкә саҡырып ҡалдылар. Әле уйларға ваҡыт бар, бәлки, спорт буйынса үҫешермен, сөнки спорт мастерына кандидатмын. Буласаҡ спорт мастерҙарын тәрбиәләрмен, бәлки. Әле институтта еңел атлетика буйынса спортсылар аҙ, йүгереүселәр килһә, яҡшы булыр ине. Сибай институты Башҡортостанда киң билдәле уҡыу йорттарының береһе, ул бөтә яҡтан да алдынғы булырға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Юғары белемле булыу ғилем эйәһе булыуҙы ғына аңлатмай. Бөгөнгө интернет заманында мәғлүмәтле булыу менән дә хайран итеп булмай. Интеллект кимәленең юғарылығы, эрудиция, мәҙәнилек шәхесте тулыһынса формалаштырмай, рухи яҡтан байыу ғына кешене кеше итә. Рухиәт иһә һөйөү, йылы мөнәсәбәттәр аша тәрбиәләнә. Сибай институтында ана шул рухилыҡ һиҙелә.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**

*ХОҠУҒЫҢ*

# ТАШЛАМАЛАР ШУНДАЙ

**Махсус хәрби операцияла (МХО) ҡатнашҡан Башҡортостан хәрбиҙәре күп кенә ташлама һәм пособиеға хоҡуҡлы. Уларҙың ғаилә ағзалары өсөн дә ярҙам саралары ҡаралған. "Егеттәр мөһим эш атҡара, улар илгә ныҡ ярҙам итә. Ә беҙ яугирҙарыбыҙ яҡлаулы һәм үҙҙәренә ҡуйылған бурысты үтәүҙә ныҡлы әҙерлекле булһындар өсөн ҡулдан килгәндең бөтәһен дә эшләргә тейешбеҙ", - тине республика Башлығы Радий Хәбиров.**



БР Финанс министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 2023 йылда махсус операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаиләләренә социаль ярҙам итеү маҡсатында 4 млрд һумдан ашыу аҡса бүленгән. Аҡсанан тыш, яугирҙар һөнәри һәм өҫтәмә белем алыу буйынса социаль сертификаттарға иҫәп тота ала. Улар бушлай белем алыу сертификаттары.

2023 йылдың мартынан Башҡортостанда яңы һөнәр үҙләштерергә, йәки өҫтәмә белем алырға теләгән МХО-ла ҡатнашыусылар өсөн сертификат биреү программаһы киңәйтелде. Хәҙер яугирҙарҙың ҡатындары һәм балалары ла Хөкүмәт иҫәбенә өҫтәмә белем алырға хоҡуҡлы. МХО-ла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары өсөн сертификат хаҡы 50 мең һум тора. Уларҙы һөнәрҙе камиллаштырыу, профессиональ белемде ҡайтанан нығытыу буйынса өҫтәмә белем биреү ойошмаларында ҡулланырға була. Киске, көндөҙгө һәм ситтән тороп уҡыу мөмкинлеге бар. Үҙең айырым белем алаһыңмы, йәки төркөм менән уҡыйһыңмы, быны ла шулай уҡ һайларға була.

Республика мәшғүллек Үҙәге мәғлүмәте буйынса, МХО-ның алты ҡатнашыусыһы ошондай сертификат алған. Уҡыу программаһын һәр кем үҙе һайлай, йәмғеһе 6 мең тирәһе вариант тәҡдим ителә. Был яугирҙар экологик хәүефһеҙлек белгесе, күтәргес- манипулятор машинисы, ҡарауылсы, "B" категориялы йөрөтмәнгә уҡырға ҡарар иткәндәр. Бер кеше эшҡыуарлыҡ-планлаштырыуҙы һайлаған.

**Хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ғаиләләренә** килгәндә, быңдай мөмкинлек менән дүрт ҡатын файҙаланған. Улар сәләмәтләндереү массажы, смета һәм хаҡ эше, сәстараш, интернет аша алып-һатыу белгесе йүнәлештәрен һайлағандар. Башҡортостандың Хеҙмәт министрлығы 2023 йылда 700 белем алыу сертификаты бирергә йыйына, уларҙың 200-е - МХО-ла ҡатнашҡандар һәм уларҙың ғаиләләре өсөн, 500-ө - артабан да эшләргә теләгән, әлеге мәлдә мәшғүллек үҙәгендә торған граждандар, ауырлы ҡатындар һәм хаҡлы ялдағылар өсөн.

Юғары уҡыу йорттарында уҡырға теләгәндәргә квота бар. Быйылдан башлап, илебеҙҙең бөтөн университеттарының ҡабул итеү кампанияһында 10 процент махсус квота буласаҡ. Ул МХО-ла ҡатнашҡандарҙың балаларына бюджет аҡсаһына бакалавриат һәм һөнәрмән программаһы буйынса уҡырға мөмкинлек бирә. Президент Владимир Путин был туралағы Указға ҡул ҡуйҙы.

**Махсус операцияла ҡатнашыусыларҙың балалары** айырым махсус квота менән вузға инә ала, йәғни ҡайһы бер осраҡта БДИ-ны бирмәйенсә лә. Был төркөмгә ата-әсәләре МХО-ла үлгән, йәки яраланғандарҙың балалары инә. Льгота Рәсәй Геройҙарына һәм өс Батырлыҡ ордены кавалерҙарына, шулай уҡ хәрби хеҙмәттә саҡта зәғифләнгән хәрби хәрәкәт ветерандарына ла ҡағыла.

МХО-ла ҡатнашҡандар ОСАГО полисы өсөн өлөшләтә аҡсаларын кире ҡайтара алалар.

Махсус операцияла ҡатнашыусылар ОСАГО менән килешеүҙе кисектергеһеҙ өҙә һәм полистың ҡалған хаҡын кире ҡайтарта ала. Был ярҙамды Рәсәй Банкы тәҡдим итә. Быңдай хоҡуҡ менән мобилизацияланғандар ҙа, МХО-ға үҙ иректәре менән киткәндәр ҙә, һөнәри хәрби хеҙмәткәрҙәр ҙә файҙалана ала.

Шуны ла белергә кәрәк, ОСАГО менән килешеүҙе кисектергеһеҙ өҙгән саҡта, полис хаҡы өлөшләтә генә ҡайтарыла. Шуныһы ла бар, үҙенең хеҙмәте өсөн страховкалаусы ошо сумманан 23 процент тотоп ҡаласаҡ.

Быйыл Рәсәй Банкы хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең иҫәптәре менән эшләгән коммерция банктарына яңы тәҡдим менән сыҡты. Айырып әйткәндә, банк махсус операцияла ҡатнашыусыларҙың иҫәптәре менән бәйле алып барылған операцияларҙың комиссияһын кәметергә, йәки унан бөтөнләй баш тартырға ҡуша.

Бынан тыш, банктарға МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә бер банктан икенсе банкҡа нисек бушлай йәки әҙ комиссия менән аҡса күсереүҙе ентекләп аңлатырға ҡушыла.

Транспорт һалымы буйынса льготалар оҙайтыла. МХО-ла ҡатнашыуылар, уларҙың ғаиләләре 2022 йылға транспорт һалымын түләүҙән азат ителгән. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 2022 йыл өсөн һалым түләү 2023 йылдың 1 декабренә тиклем дауам итә. Льгота бер генә транспорт сараһы өсөн бирелә, ул мотоцикл, еңел йәки йөк машинаһы һ.б. булырға мөмкин.

**Үҙ иректәре менән киткәндәргә льготалар.** Үҙ ирке менән махсус операцияла ҡатнашыусы 180 көн хеҙмәт итһә, республика уға 200 мең һум аҡса түләй. Уны алыр өсөн ғариза яҙыу талап ителмәй.

МХО-ла ҡатнашыусыларҙы һәм уларҙың ғаиләләрен яҡлау буйынса республикала бөгөнгө көндә 30-ҙан артыҡ сара ҡаралған. Әле иң күп ҡулланылғаны - балаларҙы сиратһыҙ балалар баҡсаһына урынлаштырыу, мәктәпкәсә учреждениеға бушлай йөрөтөү.

РБ финанс министры - премьер-министр урынбаҫары Лира Иғтисамова әйтеүенсә, әлеге мәлдә 3 мең бала балалар баҡсаһына бушлай йөрөй, 5-11 кластарҙан 2,4 мең уҡыусы һәм колледждарҙан 500 студент бушлай туҡлана. Бынан тыш, 2 мең бала түңәрәктәргә бушлай йөрөй, 300 бала һәм махсус операцияла ҡатнашыусылар санаторий-курорттарҙа дауаланған, 7,5 меңдән ашыу кеше медицина ярҙамы алған, 10-дан ашыу кеше коммуналь хеҙмәттең айырым төрө буйынса түләүҙән азат ителгән. 3,6 мең уҡыусы һәм студент йәмәғәт транспортында бушлай йөрөй.

Ошо көндәрҙә Башҡортостанда "Ватанды һаҡлаусылар" МХО-ла ҡатнашыусыларҙы Дәүләт яҡлау фондының филиалы асылды. Рәсәй Президенты Владимир Путиндың МХО-ла ҡатнашыусыларҙы Дәүләт яҡлау фондын ойоштороу тураһындағы ҡарары 3 апрелдә баҫылып сыҡты.

✓ ***Мин әйләнәм дә ҡояшҡа ҡарайым, әйләнәм дә ҡояшҡа ҡарайым. Ә ул төшлөктән ауышып бер аҙ барған да туҡтаған, шул урынынан һис ҡуҙғалмай. Салғыны ташлап, бер аҙ ятып торһам да, әсәйем өндәшмәҫ ине.***





Ноғман МУСИН

# АТАЙЫМДЫҢ ОС ҺӘНӘГЕ

Хикәйә

Шул салғыны күтәреп, тәүге тапҡыр бесәнгә китеп барғанымды күрһәгеҙ ине! Әйтерһең, минең яурында салғы түгел - флаг. Һәм оло байрамда иң алғы сафта атлайым. Барам-барам да, түҙмәйенсә, юл эргәһендәге үләнде сабып ҡарайым.

- Юҡҡа ҡыялма, танһығың ҡанып әле, - ти әсәйем.

Сабынлыҡҡа етеп, ҡырҡым башына барып баҫҡас, әсәйем салғымды тағы бер тикшереп сыҡты: ҡыбырламаймы, һапҡа тотҡа минең күҙҙә өсөн дөрөҫ ултыртылғанмы, салғы һоноҡ түгелме? Быларҙы әсәйем бик белдекле ҡиәфәт менән эшләй.

- Быйыл айлап ҡына өйрәнерһең, икенсе йыл ныҡлап саба башларһың, улым, - ти әсәйем.

Кит инде, шулай бесән бөткәнсе өйрәнсек кенә булып йөрөмәм дә инде. Ул тиклем ниәһе бар бесән сабыуҙың? Йәноҙаҡ бабай ана, донъяла иң яраткан эшем - бесән сабыу, ти. Ҡыйын эш булһа, яратыр инеме ни ул? Әсәйем салғыны минә тоттора, уйҙарымды белгән кеүек, һаман үҙ хәбәрен һөйләй.

- Бесән сапҡанда көс тә, таһыл да кәрәк. Беләкте һуҙа торған эш ул.

Эй, ошо әсәйемде, хәбәрҙе ҡыҙыҡ ҡына итеп һөйләй ҙә ҡуя. Бесән сапҡан һайын беләге һуҙылһа, кешеләрҙең ҡулы ергә һөйрәлеп йөрөр ине.

Әсәйем эргәбеҙҙәге ҡайын урманын яңғыратып, ялан өҫтөнә ниндәйҙер моң таратып минең, апайымдың, аҙаҡтан үҙенең салғыһын яныны ла:

- Хоҙайға тапшырайыҡ, - тип саба башланы. Оҙон һәм тығыҙ булып үҫкән үлән араһынан уның салғыһы ғәжәп еңел йөрөй, "гырш-гырш" иткән күнелле тауыш ҡына ишетелеп ҡала.

- Салғыңды үтә ҡыҫып тотма, усың күберсер... һелтәгәндә салғыңды ныҡ күтәрмә, алымыңдың арт яғы тигеҙ киҫелмәҫ... Өйрәнгәнсе тарыраҡ алдырып сап, хәлеңде тиҙ бөтөрөрһөң... - Әсәйем үҙе саба, үҙе туҡтауһыҙ мине өйрәтә.

Апайым былтыр уҡ сабырға өйрәштергәйне инде. Әсәйем артынса салғыһын килешле генә һелтәп төшөп тә китте. Баҡуй башы эшләгәс, артына әйләнеп ҡарап, көлә бит әле.

- Һин, Кинйәбай, артыҡ ҡыҙып китеп, минең үксәне ҡыя сабып ҡуйма, - ти.

Өндәшмәнем. Иргәләшеп тороһы килмәй ине. Бына мин тәүге тапҡыр ҡырҡым башына сығып баҫтым, тәүге тапҡыр сабынлыҡта салғы һелтәнем һәм... бер нисә услам үлән ергә ауыу менән салғымдың осо тупраҡҡа ҡаҙалды. Уны һурып алып, яңынан һелтәгәйнем, үләндәр тигеҙ уҡ киҫелде. Тик икенсе ҡабатында салғы тағы киреләнде - үләндәрҙе ялпаштыра йығып, өҫтән ҡәйелеп үтте. Асыуланып сабып алып китмәксе иткәйнем, салғым ниндәйҙер дүмсәгә барып бәрелде. Ни булды һуң әле? Нинә һелтәгән һайын бер нәмәһе табылып тора? Хәшейә апайҙың алымында ана дүмсә-фөлән дә юҡ, ыңғай сабып китеп тик бара.

Мин ҡыяла-ҡыяла бер-ике аҙым да китә алманым, әсәйем, ҡырҡым осона сығып, бакуйын кире ҡайтарып, минең янға әйләнеп килде. Салғыһын яурына күтәргән көйө аҙыраҡ ҡарап торғас:

- Туҡта әле, улым, - тип салғымды алды. - Салғыңдың йөҙө бына шулай үргәрәк ҡарап йөрөһөн. Һелтәгәндә өйрәлтеп килтереп бына шулай һелтә...

Әсәйем шулай һөйләнә-һөйләнә минең салғы менән саба. Салғы ҡаҙалмай ҙа, дүмсәгә лә бәрелмәй, үләндәр төптән генә тигеҙ киҫелеп, ҡыйылып ятып ҡала.

Көн буйы әллә нисәмә тапҡыр ана шулай туҡтап-туҡтап өйрәтте мине әсәйем. Һуңға табан апаруҡ һелтәй башлағайным да, хәл бөтөбөрәк китте. Бил дә, беләк менән ҡулбаштар ҙа ауырта, усым бер нисә урындан ҡабарып сыҡты. Мин әйләнәм дә ҡояшҡа ҡарайым, әйләнәм дә ҡояшҡа ҡарайым. Ә ул төшлөктән ауышып бер аҙ барған да туҡтаған, шул урынынан һис ҡуҙғалмай. Салғыны ташлап, бер аҙ ятып торһам да, әсәйем өндәшмәҫ ине. Ғәр, сәм тигән нәмә бар бит. Битем буйлап аҡҡан тиремде еңем менән һөртәм дә тағы сабырға тотонам.

Шулай ҙа әсәйем хәлемде һиҙҙе.

- Оҙаҡламай ҡайтыр саҡ та етә. Арығанһыңдыр, туҡта инде, улым, - тине. - Иртәгә лә көн бар.

Иртәгә лә, иртәнән һуң да көндәр шундай уҡ оҙон булырмы икән? Ҡасан бөтөр ундай көндәр? Әле бит бесәндең башы ғына...

Иртәгеһенә йоҡонан торһам, билем шул тиклем ныҡ ҡатҡан, бөгөлһәм, шарт итеп һыныр ҙа ҡуйыр төҫлө. Ләкин тормайынса әмәл юҡ ине. Сабында ҡалдырып ҡайтҡан салғым көтә бит мине. Әсәйемә задание итеп һалынған бесәнде кем сабыр? Үҙебеҙҙең һыйырҙың ашарына кем әҙерләр?

Был көндө тәүге һелтәүҙә үк салғымдың осо ергә ҡаҙалманы, ыңғай уҡ сабып алып киттем. Әсәйем:

- Һәй, минең улым, ана бит, өйрәнеп тә алды, - тип ҡеүәтләп тә ебәрә мине.

Тик бына усымдың ҡабарған урындары ауыртып йәнемде ҡыя. Төш етә башлағас, әсәйем:

- Бесән сабырға өйрәнгәндә иң ауыры - икенсе көн. Үҙемдең дә баштан үткән, беләм. Бар, ҡаршылағы анау ҡырҙзға сыҡ та төшкө сәйгә еләк йый, аҙыраҡ ял да итерһең, - тип минә икенсе йомош ҡушты. Ул мине киске һыуынында ла иртәрәк туҡтатты. Әллә шуға инде, был көн кисәгеһенән ҡыҫҡараҡ тойолдо минә.

Өсөнсө көнөнә иһә, кискә табан ныҡ ҡына арыһам да, әсәйем менән апайым ыңғайына эшләнем. Бил дә, беләктәр ҙә әллә ни ауыртмай. Йәноҙаҡ бабайҙан тапатыу өсөн, ҡайтҡанда салғымды күтәреп алдым. Ул яурынымда йөк булып ятмай, күңелемә ниндәйҙер рәхәтлек бирә. Күрһендәр әйҙә минең бесән сабып ҡайтып килгәнемде. Беҙ кемдән кәм! Әсәйем дә бит ана:

- Өс салғы - өс салғы инде. Кеше ыңғайына эшләп еткерербеҙ әле бесәнде, - ти.

Ысынлап та, сабыу менән йыйыуҙы ыратып алып барҙыҡ беҙ. Ләкин эш кәбән ҡойоуға килеп терәлгәс, әсәйем аптырабыраҡ ҡалды. Сөнки бесән ваҡытында һәр ауыҙ көн иҫәпле. Һәр кем үҙ эшен ыратып ҡалырға тырыша. Әсәйем ике-өс кешегә барып, кәбән ҡойоп биреүҙәрен һорағайны ла, тыңламағандар. Их, тип эстән һыҙам мин, атайым ана Ғөбәйҙә әбейгә ярҙам итәм тип ятып үлде. Нинә кеше шулай изгелекһеҙ була икән?..

Иртәнсәк әсәйем байтаҡ һүҙһеҙ ултырҙы ла, апайым менән минә ҡарап, кәңәш иткән ҡиәфәттә әйтте:

- Күкрәк һәнәге менән ос һәнәген күтәреп алып барайыҡмы? Сабын тирәһендә кәбән ҡойған берәй кешенән ат алып, күбә тарттырһаҡ, үҙем маташтырып ҡарайыммы икән әллә, тим.

- Нимәне, әсәй? - тип һорай апайым, уның тел төбөн аңламайынса.

- Кәбәнде әйтәм инде. Нисек ҡойғандарын күргән бар. Берәй ун биш-егерме күбәне, моғайын, өйөп ҡуйырмын әле. Көндәр боҙолоп китһә, күбәләр яуында ултырып ҡалыр.

Мин кәбән һәнәктәрен өй башынан төшөргәс, әсәйем ос һәнәген, тәүге тапҡыр күргәндәй, ҡулына алып, уның һәлмәклеген, оҙонлоған самалап торҙо, ауыр көрһөндө лә:

- Алып барып ҡарайыҡ әле, - тине.

Ат табып, күбәләрҙе тарттырыу әллә ни оҙаҡ булманы. Әсәйем күбәне әйеп ебәреп тора, мин елдереп йөрөп тарттырам. Аҙаҡтан урмандан, күбә арҡанына тағып һөйрәтеп, өс тағанлыҡ алып килдек. Әсәйем, уларҙы һөйәп, таған ҡорҙо, нығыраҡ торһон, тайышмаһын өсөн, баштарын нәҙек муйыл сыбыҡ менән кәбән үҙәгендә ҡалдырыласаҡ ҡайынға ҡуша уратты. Шунан, артабан ни эшләргә белмәгәндәй, сиккәрәк барып ултырып, һүҙһеҙ ҡалды. Мин өйкөм муйыл ағастарына һөйәп ҡуйылған ос һәнәгенә, унан уйға сумып ултырған әсәйемә ҡарайым. Әйтерһең, ошо мәлдә һәнәктәр менән әсәйем араһында һүҙһеҙ алыш бара һәм кәбәндең ҡойолоу-ҡойолмауы кемдең еңеп сығыуына бәйле ине. Бына әсәйем иплән кенә урынынан күтәрелде, әле генә үҙе һөйәгән таганга күҙ һалды.

- Хәшейә, һин, ҡыҙым, кәбән башында торорһоң. Кинйәбай туҙышҡан бесәнде йыйыр, - тип күбә һәнәгенә тотондо әсәйем.

Ошо көндө әсәйемдең кәбән һалғанын ғүмеремдә онотмам. Тәүҙә күбә һәнәге менән еңел уҡ ырғытты ул бесәнде. Оҙаҡламай таған тирәһе түңәрәкләнеп, кәбән төбө рәүешенә инде.

- Һәй, кеше эшләмәгән эшме, шулай әкренләп ҡойоп бөтөрбөҙ әле, - ти әсәйем, үҙенүҙе йыуатҡан кеүек.

Кәбән бейегәйә башлағас, күбә һәнәген ҡуйып, күкрәк һәнәген алды ул. Оҙон һәнәк менән бесән сәнсеп алыуы ҡыйыныраҡтыр, әлбиттә. Шулай ҙа әсәйем төҫ бирмәй, хәле бөткәндә аҙ ғына ултырып ял итә лә, айран эсеп тамаҡ ебеткәс, тағы һәнәгенә тотона. Бына кәбән яртыһынан уҙып китте. Хәҙер уны тарайтып, ослай башларға кәрәк. Әсәйем күкрәк һәнәген ситкә ҡуйып, ос һәнәге һөйәүле торған ергә барҙы ла, алырға баҙнат итмәгәндәй, уға ҡарап туҡтап ҡалды. Ә ос һәнәге, атайымдан ҡалған, Йәноҙаҡ бабай маҡтаған һәнәк, шул тиклем матур, - күккә укталған уҡ шикелле тора. Әсәйем уны алды ла кәбән төбөнә ҡарай атланы. Әллә әсәйем сибегерәк кәүҙәле булғанға инде, ос һәнәге уның ҡулында уғата оҙон күренә. Нисек бесән күтәрер икән ул шуның менән?

"Теге саҡта атайым Ғөбәйҙә әбейгә ярҙам иткәндәге кеүек, берәйһе килеп сыҡһа инде", - тип тирә-яҡҡа ҡарайым мин. Тик әйләнә тирәлә ир затынан бер әҙәм юҡ.

Хәүефләнеүем һис тә юҡтан түгел ине. Әсәйем кәбәнән бесәнде еңелсә генә сәнсһә лә, ос һәнәгенең һабын ергә ҡаҙап, уны ҡалҡыта алмай аҙаплана. Миңә һәнәк һабының төбөнә, таймаһын өсөн, баҫып торорға ҡуша. Ос һәнәген ҡайһы саҡта икәүләп "тыңлата" алмайбыҙ. Әсәйем ҡалҡыта башланымы, һәнәктең төбө, минең өҫтөнә баҫып тороуыма ла ҡарамай, ер ҡыртышын йыртып, бер яҡҡа тайып сыға ла китә һәм әсәйем бесәнде ергә кире төшөрөргә мәжбүр була. Саҡ ҡына хәл йыйғас, әсәйем һәнәген яңынан бесәнгә ҡаҙай... Ныҡыша торғас, һәнәк турайтып баҫтырыла. Уның йәптәрендә бер ҡосаҡтай бесән ялпылдай. Хәҙер ана шуны күтәреп кәбән башына ырғытырға кәрәк. Әсәйем, ысын кәбәнселәр кеүек, устарын алмаш-тилмәш төкөрөкләп ала, шунан һаптың осонан тотоп, һәнәкте күтәрә. Үҙенән әллә нисәмә тапҡырға оҙон һәнәкте күтәреп кәбәнгә яҡынлаған саҡта ул сайҡалып-сайҡалып китә. Бына хәҙер уның биле һығылып төшөр, һөрлөгөп йығылыр йә күкрәгә шартлар төҫлө. Юҡ, бирешмәй әсәйем, асырғанып-сытыйып кәбән төбөнә барып етә лә барлыҡ көсөнә бесәнде юғары сөйә. Шунан артына сигенә биреп, бесәндең үҙ урынына ятыу-ятмауын тикшерә, Хәшейә апайға, үҙенәрәк тарт йә ситкәрәк төшөр, шул килеш тапа, тип күрһәтмәләр бирә.

Нисек итһәк тә иттек, ҡояш байыуға бер кәбән ҡойолдо. Әсәйем ситкәрәк китеп, уны өйөрөлтөп ҡарап сыҡты. Мин уның арыған йөҙөндә ҡәнәғәтләнеү, ғорурлыҡ билдәләре сағылыуын күрҙем.

Тик кәбән һалыу әсәйемдең кәрен ныҡ алған, күрәһең. Ул, ҡайтҡас, бер сынаяҡ ҡына сәй эсте лә хәлһеҙләнеп йығылды. Их, ҡасан ҙурайып, әсәйемде был ыҙаларҙан ҡотҡарырмын икән?

* * *

Бынан аҙаҡ тағы бер йәй әсәйем үҙе ҡойҙо әле кәбәнде. Быйыл иһә миңә ун дүрт йәш тулды. Унан хәҙер кәбән ҡойҙормаҫҡа иҫәп тотоп йөрөйөм. Атайымдың ос һәнәген үҙ ҡулыма алырға кәрәк.

Быйыл бесән эшләү тағы ла ҡыйыныраҡ буласаҡ. Йәшең етте, тип апайыма ла задание һалдылар. Әсәйем менән икәүһе алты тонна бесән әҙерләп тапшырырға тейеш. Уртасараҡ дүрт кәбән тигән һүҙ бит ул. Өҫтәүенә, быйыл сабынлыҡтар үҫмәгән.

- Артелгә бесәнде Оҫҡонло туғайында эшләйһегеҙ, - тип, ҡапҡа төбөнә һыбай килеп туҡтап, һуҡыр Шәһит сабынлыҡтың ҡайҙа икәнен дә әйтте. - Ҡайҙа сабыр урын табырһығыҙ, үҙегеҙгә бесәнде шунда еткерегеҙ. Оҫҡонлонан бер һәнәк бесән дә бирмәйбеҙ, - ти бит әле.

**(Дауамы. Башы**
**15-20-се һандарҙа).**

*АҒИНӘЙҘЕҢ ӘЙТКӘНЕ*

**Һуңғы йылдарҙа республикабыҙ ҡатын-ҡыҙҙарының ҡул эштәренә, бигерәк тә үҙебеҙҙең милли шөғөлдәргә әүҙем тотоноп китеүен күрәбеҙ. Иҫ киткес зауыҡлы әйберҙәр эшләгән оҫта ҡуллылар араһында ғүмере буйы ошо шөғөлөнән айырылмай йәшәгәндәре лә бар. Шундай ханымдарҙың береһе - быйыл "Ҡурай даны" милли телевизион премияһына лайыҡ булыусы ҡул оҫтаһы, тормош иптәше менән Рәсәйҙә генә түгел, сит илдәрҙә лә үткәрелгән марафондарҙа әүҙем ҡатнашыусы Вәсилә Камалетдинова. Уның милли кейемдәрҙе тергеҙеү эшенең әһәмиәте тураһындағы фекерҙәрен уҡыусыларыбыҙға ла еткерәбеҙ.**

# МИЛЛИ КЕЙЕМДӘРЕБЕҘ...

## тарих һөйләй




- Милли кейемдәрҙе табыу, тегеү эшенә 2015 йылдарҙан алып ныҡлап тотондом, ә инде ҡыҙыҡһыныуым мәктәп йылдарынан уҡ килә. Туғыҙынсы синыфта уҡығанда концерт ҡуйырға милли кейемдәр эҙләп, бер әбейҙән - күлдәк, икенсеһенән - сулпылар, өсөнсөһөнән камзул алып торғандан башланды был ҡыҙыҡһыныуым. Һаҡалдар (селтәр, яға, муйынса ла тиҙәр) беҙҙең яҡта - Архангел районы Көмәрле ауылында һаҡланмаған. Ундайҙы бер генә әбейҙә күргәйнем, тик уның һаҡалында мәрйен-тәңкәләр түгел, төймәләр генә тағылғайны. "Милли кейем беҙҙең яҡта нindәй булған икән?" тигән һорау мине ҡайһы бер эҙләнеүҙәргә, тикшеренеүҙәргә йәлеп итте. Һөҙөмтәлә беҙҙең яҡта башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары һаҡал, хәситә һәм дәүәт таҡҡан икәнен асыҡланым. Шулай ҡыҙыҡһынып, милли кейем һәм биҙәүестәрҙе тергеҙеүгә ылығып киттем дә, "Тамға" конкурсына үҙем сиккән таҫтар ( башҡорт ҡатын-ҡыҙының баш кейеме) менән ҡатнашырға ҡарар иттем. Был баш кейеменең өлгөләре лә беҙҙең яҡта һаҡланмаған, әммә уны оло йәштәге бөтөн төбәктәрҙәге ҡатындар ҙа бәйләгән.

Ғөмүмән, районыбыҙҙа башҡорт халыҡ кейеменең музейы ла юҡ әлегә. Әлбиттә, ауыл мәктәптәрендә бер аҙ ҡомарткылар тупланған, тик тулы комплекттар юҡ. Мәҫәлән, күлдәкте Тирәкле ауылы мәктәбе музейында ғына күрҙем, уныһы ла 1950 йылдарҙағы йәш ҡыҙҙар күлдәге. Боронғо үрнәктәр, ҡыҙғаныска күрә, һаҡланмаған. Бер генә боронғо фото ҡалған, унда Тәүәкәс ауылы ҡатыны һаҡал тағып төшкән. Шулай ҙа нәнәйемдең (атайымдың әсәһе) һаҡалы нindәй булғанлығын һорашып-һорашып, өлгөһөн килтереп сығарҙым. Уның биҙәүесе ҡыҙыл түгел, ә һорғолт ерлеккә һалынған булған. Тимәк, ҡояшҡа унып һорғолтланған булһа, ҡара ерлеккә эшләнгән, тигәнде аңлата. Бәлки, алмиҙеү ҙә булғандыр, сөнки мәрйендәре һирәк, тәңкәләре тура вертикаль рәүештә тегелгән, ҡыҙыл ҡашлы брошка ла беркетелгән. Ике туған апайым уны күргән булған, стенала эленеп торҙо, тип хәтерләй. Уның менән төрлө алмиҙеү-һаҡалдарҙың фотоларын ҡарағандан һуң, был ҡыпсаҡ алмиҙеүенә оҡшаған, тип ныҡымта яһаныҡ. Көмәрле ауылы халҡын табын ырыуына индерһәләр ҙә, беҙ ҡыпсаҡ аймағына ингән булғанбыҙ, тип һөйләгәндәрен ишеткәнем бар ине.

Бына бер генә милли биҙәүесебеҙ ҙә күпме тарих һөйләй беҙгә! Ә инде боронғо йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Әйтәйек, ҡашмауҙы никах уҡылғас, ҡыҙҙы кейәү йортона оҙатҡанда кейҙергәндәр. Был баш кейемен йәш балалар, йәш ҡыҙҙар, түлдән ҡалған оло ҡатындар киймәгән. Ҡайһы берҙәренә бер малай тапҡас ҡына ҡашмау кейеү рөхсәт ителгән. Ә бәләкәй ҡыҙҙар маңлайса кейгән, өлкән йәштәге ҡатындар ҡушъяулыҡ ябынған, таҫтар бәйләгән, һарыуыс таҡҡан. Ә хәҙер бәләкәй генә ҡыҙҙарға ла ҡашмау тегеп кейҙереп, фотоға төшөрөп һалалар, маңлайса тегеп кейеп, оло ғына инәйҙәрҙең бейеп йөрөгәнен күргән бар. Шуның өсөн бик тә мөһим милли кейемдәребеҙҙең дөрөҫ тегелеше, биҙәүестәребеҙҙең дөрөҫ тәғәйенләнеше. Был йәһәттән республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының милли кейемдәрҙе йәш быуынға теүәл һәм дөрөҫ итеп тапшырыу маҡсаты менән башлаған "Хаталар өҫтөндә эш" тигән проекты хуплауға лайыҡ. Хәҙер бер нисә йыл инде ағинәйҙәр һәр ырыуҙың милли кейемен һәм биҙәүестәрен тергеҙеү менән мәшғүл.

Ғөмүмән, башҡорт ҡатын-ҡыҙын уҙ асылына ҡайтарыу буйынса күп эшләй ошо ойошма ағзалары. Ә был маҡсатҡа өлгәшеүҙә кейем ҙур роль уйнай. Мәҫәлән, беҙҙең башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары баштарына яулыҡ ябынмайынса, сәстәрен ялбыратып йөрөмәгән. Был, бер яҡтан, дингә бәйле булһа, икенсе яҡтан, тәртип шулай булған. Мин өләсәй менән әсәйемдең нисек сәс тарауҙарын күреп үҫтем. Улар ултырып, алдарына аҡ яулыҡ йәйеп, сәстәрен алға төшөрөп, шул яулыҡ өҫтөнә генә тарап, матур итеп үреп ҡуялар ҙа, бер сәс бөртөгөн ҡалдырмай йыйып, усаҡҡа һалалар ине. "Сәс бөртөгөн ташларға ярамай, бер бөртөк сәсеңде ҡош үҙенең ояһына алып китһә, башың ауырта", - тиҙәр ине. Бына шундай ырымдар бик күп булған, был таҙалыҡ, тәртип өсөн дә уйлап әйтелгәндер. Кешенең инаныстары, кейеме лә, йолаһы ла бер-береһенә бәйләнеп килгән. Әле лә шулай булһа, бәлки, халыҡ та тәртиплерәк булыр ине.

Бына ошо үҙебеҙҙең йолаларҙы, үҙлегебеҙҙе онотмаҫ өсөн, боронғо менән бәйләнеш булһын өсөн милли кейемдәрҙе тегеү, тергеҙеү кәрәк. Шөкөр, йәштәр араһында ла милли кейем һәм биҙәүестәр менән ҡыҙыҡһыныусылар һаны арта, быны үҙҙәренә шөғөл итеп алғандар һәм аҡса табыу сығанағына әйләндергәндәр ҙә бар. Быға ҡыуанырға ғына ҡала. Үҙеңдең ата-бабаларың йәшәгән төйәктең, халҡыңдың тарихын, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеп, артабанғы быуындарға теүәл һәм дөрөҫ итеп тапшырырға кәрәк. Тарихын белмәгән халыҡтың киләсәге лә юҡ, тиҙәр бит инде.

Тик шуныһы ҡыҙғаныс, ауыл балалары ла йылдан-йыл башҡортса насар һөйләшә. Бик борсолдора был хәл. Шуға ла ауылыбыҙҙағы бер нисә ағинәй менән мәктәпкә, балалар баҡсаһына барып, балаларға ошо һоҡланғыс кейемдәребеҙ тураһында һөйләп ҡайтыуҙы ғәҙәт итеп алдыҡ. Уларға ейәнсәрҙәремә алдырған "Аҡбуҙат" журналдарын да алып барып тараттым. Милли уйындар үткәрергә тип тә саҡырғылайҙар. Уйын уйнағанда йырларға ла тура килә бит инде. Ә беҙҙең балалар русса ғына йырлай булып сыҡты. "Шайморатов генерал" йырын да белмәйҙәр хатта. Бынан шундай һығымта: оло быуын кешеләре - ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар балалар эргәһендә йышыраҡ булырға, тарихыбыҙға, туған телебеҙгә, милли кейемдәргә, мәҙәниәткә һәм йолаларға ҡыҙыҡһыныу уятырға тырышырға тейеш.

**Камила ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

*УЙМАҠ ХИКӘЙӘЛӘР*

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*



# АПАЙЫҢДЫ МИҢӘ БИР!

Ауыл зыяратында йөрөйөм. Һәр ҡәбер ташы алдында оҙаҡ ҡына баҫып тороп, мәрхүмгә ҡағылышлы үткәндәрҙе хәтергә төшөрәм. Бында Буранбай ята. Ғүмере буйы фермала малда эшләне. Холҡо ысынлап та буранлы-дауыллы булды уның, әммә бүлексә малына сыбыртҡы менән киҙәнмәне, һуҡмаһы һис ҡасан, яҡын кешеһен һыйлағандай итеп баҡты, ҡараны. Шул һыйырҙары менән көңгөр-ҡаңғыр килеп һөйләшә лә торғайны.

Арыраҡ Нурғәле ята. Тракторсы. Йәйен тәгәрмәсле тракторға ултырҙы, ҡышын - сылбырлыһына. Балалар ише тәм-том ярата торғайны, ҡышын беҙгә тракторы менән һөйрәтеп бесән килтерһә, табын артында ашҡа үрелмәй, кәнфит һурып, сәй һөрпөлдәтеп тик ултырыр ине. "Ит ҡабып ебәрһәңсе, Нурғәле!" ти әсәйем. "Юҡ, апай, мин кәнфит яратам!"

Бер ситтәрәк Вәхит. Тәҙәүсе ине һайлаған һөнәре. Йор һүҙле булды, сәсән ише шиғыр юлдарын әйтеп һөйләште гелән. Ауыҙынан тәмәке өҙөлмәне, төшмәне.

Игелекле, мәрхәмәтле, һәйбәт кешеләр ине ағайҙар, үтә һәйбәт.

- Хәйҙәр, мә, аҡса! - ти Буранбай.
- Нимәгә ул миңә?
- Бәй, ҡәйнеш аҡсаһы, апайыңды миңә бир!
- Һиңә кейәүгә сығып, ғүмер баҡый туҡмалып көн итһенме?
- Юҡ, бармағым менән дә ҡағылмам, өрмәгән ергә ултыртмаҫмын, бир, ә!
- Булмай, һинән мал һыҡраһы, силус еҫе килә...

Урам сатында Нурғәлене тап итәм.

- Ҡустым, давай, мин һиңә бер тиләшке итеп ҡоро-һары килтереп ауҙарам!
- Ҡарауһыҙ, етем әбей-һәбейгә апар әйҙә, беҙгә кәрәкмәй.
- Һуң, буштан-тәккә ҡоро ҡул һорап булмай ҙа, буштың атаһы күптән үлгән, киләһе йомала апайыңды һората килергә ине иҫәп!
- Ары йөрө, апайым ғүмере буйы һинең мазутыңды йыуып көн итһенме, таптың һантыйҙы!

Алыҫ Сибайҙан тәҙәүләштән Вәхит ҡайтып төшкән. Ни тиһәң дә, ҡала кешеһе бит, фырт ҡына итеп кейенеп тә алған: клёш салбарҙа, әтәс һүрәте төшөрөлгән күлдәктә. Ғәҙәтенсә, ауыҙында тәмәке быҫҡый.

- Ыслушай брат, мине нишләп ваҡытһыҙ ҡайтып төшкән тип уйлайһың?
- Йөрөйһөңдөр тинтерәп, берәҙәкләнеп.
- Һис ҡасан эт һуғарып йөрөмәй ул ағайың, йомошом һиндә.
- Әйтеп ебәр, ҡолаҡҡа ягылырлыҡ булһа, тыңлап ҡарайыҡ!
- Апайыңды миңә бир!
- Бирмәйем!
- Ништәп?
- Өй эсен тәмәке ысы менән ысларға штули...

Бер көн әсәйемә әйтә ҡуйҙым:

- Аптыраттылар был ағайҙар, апайымды һорайҙар, һоратмаҡсылар!
- Һораһалар һуң, бир, ғүмере буйы беҙҙә йәшәмәҫ апайың.
- Бирмәйем, тигәс, бирмәйем, ул икебеҙгә лә бер юлы кәрәк!

Ҡолағымда өс ағайҙың да тауышы бер юлы яңғырап киткәндәй итә: "Апайыңды миңә бир! Апайыңды миңә бир! Юҡ, миңә...."

"Кем алыҡ, ағайҙар, бирәм!" тип ҡысҡырғым килә. Тик ағайҙар ҙа юҡ, апайым да...

ИНТЕРНЕТТАН



## УКОЛҺЫҘ ВАКЦИНА

■ 2030 йылға бөтөн донъяла инсульттан үлем осраҡтары йылына 5 миллионға етеүе ихтимал. Был турала Америка неврология академияһы белдерә. Эш барышында авторҙар 1990-2019 йылдарҙағы мәғлүмәттәрҙе тикшереп, донъяла халыҡ арта барған һайын, ишемик инсульттан үлеүселәр һаны ла күбәйеүен асыҡлаған. 1990 йылда 2,04 миллион булһа, 2019 йылға инде был һан 3,29 миллионға еткән. Быйың бер сәбәбе булып донъя халҡының ҡартайыуы тора, ти тикшеренеүселәр. Бынан тыш, ошо сиргә килтереүсе 7 төп фактор асыҡланған. Улар тәмәке тартыу, натрий өҫтөнлөк иткән диета, юғары ҡан баҫымы, бөйөрҙәрҙең фунцияһы боҙолоуы, ҡанда шәкәр кимәленең юғары булыуы, артыҡ ауырлыҡ. Ошоларҙың барыһын да иҫәпкә алып, ғалимдар 2020-2030 йылдарҙа хәл нисек буласағын фаразлап ҡараған. 2030 йылға ишемик инсульт йылына 4,9 миллион кешенең ғүмерен ҡыясаҡ. Табиптарҙың һәм хөкүмәттең инсульт хәүефен түбәнәйтеү буйынса тырышығын иҫәпкә алғанда ла ошондай ҙур һан килеп сыға. Иҫәпләүҙәргә уларҙы һалмағанда иһә үлем осраҡтары 6,4 миллонға етәсәк.

■ Стресс ваҡытында туҡтауһыҙ ашай башлайһығыҙмы? Табип-диетолог Наталья Круглова әйтеүенсә, кеше ошо рәүешле күңелһеҙ тойғоларын йәки хәлен еңеләйтергә тырыша. "Стресс тип хәүеф тойғоһон да, арыуҙы ла, көсөргәнеште лә, тулҡынланыуҙы ла атайҙар. Ҡайһы ваҡытта аҙыҡҡа үрелә башлайһығыҙ, тәүҙә ошоно билдәләгеҙ", - ти табип. Икенсе аҙым булып ашаған ризығыңдың һинең ниндәй ихтыяжыңды ҡәнәғәтләндерә икәнен асыҡлау тора. Әйтәйек, баланы йоҡлатҡас, шоколодлап сәй эсәһегеҙ икән, тимәк, һеҙ ошо рәүешле арыуығыҙҙы, үҙегеҙгә ваҡыт бүлә алмауығыҙҙы ҡаплайһығыҙ. Ризыҡты, был осраҡта шоколадты нимә алыштыра ала - шуны билдәләйһегеҙ. Ошо рәүешле стресты аҙыҡ менән түгел, күңелегеҙгә ятҡан шөғөл менән алыштыраһығыҙ.

■ Рәсәй ғалимдары энәһеҙ вакцинация ысулы уйлап тапҡан. Вакцина тирегә һөртөлә һәм уны артабан ультратауыш ярҙамында тәнгә индерәләр. Яңы ысул иммунитет күҙәнәктәрен дә әүҙемләштеп ебәрә. Әле вакцинаны инъекция йәки укол ярҙамында һалалар. Был процесс тәжрибәле персонал булыуын талап итә, укол һалғанда инфекция инеүе, ҡан тамырҙарының йәрәхәтләнеүе бар. Шуға ла ғалимдар яңынан-яңы ысулдар уйлап табырға тырыша. Тик ул хәүефһеҙ булыуы менән бергә тәьҫирле булырға тейеш. Тирелә булған тәбиғи иммунитетты ошо рәүешле әүҙемләштереп ебәреү иһә көслө иммун яуабы бирергә тейеш, тип көтөлә.

■ COVID менән ауырығандан һуң организмда D витамины күләмен тикшертергә кәрәк. Сирҙән һуң оҙаҡ терелеп китә алмау тап ошо витамин ҡытлығы менән бәйле. Ауырығандан һуң сирҙең билдәләре 12 аҙнанан күберәк һаҡланыуы пациенттарҙың 50-70 процентында күҙәтелә. Тикшеренеүҙәрҙә 51-70 йәшлек 100 пациент ҡатнашҡан. Улар больницаға эләккәс тә D витамины кимәлен тикшереп ҡарағандар һәм уны 6 айҙан һуң тағы ҡабатлағандар. Организмда D витамины кимәле түбән булғанда кеше оҙағыраҡ дауаланған, улар үҙҙәрен томан эсендә кеүек тойған, хәтерҙәре насарайған, бар нәмәне онота башлағандар.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# ХАЛҠЫБЫҘҘЫҢ...

## рухи короленә арналды

**Май урталарында Өфөлә башҡорт халҡының арҙаҡлы дин әһеле һәм йәмәғәт эшмәкәре Зәйнулла Рәсүлевтың тыуыуына 190 йыл тулыуға арналған "Шәйех Зәйнулла Рәсүлев һәм Евразия халыҡтарының тәссауыф мәҙәниәте" тип аталған халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция үтте. Уның эшендә Исламды, динде, тыуған яҡты өйрәнеүселәр, тарихсылар, филологтар, философтар, журналистар, яҙыусылар, дин һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре, Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән генә түгел, алыҫ сит илдәрҙән дә вәкилдәр ҡатнашты.**

Башҡортостанда Зәйнулла Рәсүлев тормошона етди иғтибар 2000 йылдарҙан һуң башлана. 2008 йылда беренсе фәнни-ғәмәли конференция ойошторола, һуңынан Учалы ҡалаһында асылған мәсеткә уның исеме бирелә. Быйылғы конференция юғары кимәлдә һәм алтынсы тапҡыр үткәрелә. Сарала сығыш яһаусылар бөгөнгө болғанышлы заманда Зәйнулла Рәсүлевтың һәм суфыйсылыҡтың әһәмиәтен билдәләп кенә ҡалманы, ә уның эшмәкәрлегенең иғтибарҙан ситтә ҡалған яғына ла баҫым яһаны.



Ойоштороусыларҙың береһе булып сығыш яһаған Өфө фән һәм технологиялар университетының фән эше буйынса проректоры Светлана Мостафина ректор исеменән тәбрикләү һүҙендә ил Президенты Владимир Путиндың традицион Исламдың Рәсәй мәҙәни кодының мөһим өлөшө булып тороуын даими һыҙыҡ өҫтөнә алыуын билдәләне. "Зәйнулла Рәсүлев - тап традицион Исламдың бөйөк вәкиле. Уның халыҡ мәғарифы идеалдарына ысын күңелдән хеҙмәт итеүе, йәмғиәт үҫешенә мөмкин тиклем өлөш индерергә тырышыуы, эҙмә-эҙлекле гражданлыҡ позицияһы тыуған илдең һәр патриотын илһамландырырға һәләтле, - тине үҙенең сығышында Светлана Анатольевна. - Дин белгестәре, ғалим, педагогтар Зәйнулла Рәсүлев һәм уның улы мөфтөй Ғабдрахман Рәсүлевтың мирасы - университет алдына ҡуйылған бурыстарҙы үтәүҙең ышаныслы нигеҙе. Рәсүлевтарҙың эшмәкәрлеге Рәсәй мосолмандарының ғына түгел, Урта Азия, Ҡаҙағстан, Төркиә, Ғәрәп Әмирлектәре илдәре мосолмандарына ла йоғонто яһай. Рәсүлевтарға булған ихтирам күп ҡырлы донъя шарттарында уңышлы диалог, динде файҙаланып, йәмғиәтте тарҡатырға тырышҡан деструктив ағымдарға ҡаршы тороу нигеҙе булып тора".

Рәсәй мосолмандары Диниә назараты рәйесе, мөфтөй Тәлғәт Тажетдин бөйөк имам, педагог һәм мәғрифәтсе Зәйнулла Рәсүлевтың бай тормош тәжрибәһе бик күп мосолмандарға өлгө булып тороуын белдерҙе.

"Рухи үҫештең юғары дәрәжәһенә өлгәшкән дин әһеле булараҡ, ул төбәктең төрки халыҡтары араһында меңәрләгән уҡыусы тәрбиәләне, бөтә донъя менән бәйләнеш булдырҙы. Күрәҙәлек һәм дауалау һәләтенә эйә булып, мендәрсә мохтаждарға рухи ярҙам йәһәтенән өмөт тыуҙырҙы.

Мәғариф системаһында ла ул алтын урталыҡты тотто һәм мәҙрәсәләрҙә донъяуи фәндәр уҡытыуҙы хупланы, икенсе яҡтан, рухи белем биргәндә бары тик донъяуи фәндәрҙе генә ҡалдырып, дини белем усаҡтарынан Ислам һәм шәриғәт, әхлаҡ һәм рухиәт нигеҙҙәрен ҡыҫырыҡлап сығарыуға ҡаршы булды. Уның варисҭары дәүләт, конфессиялар өсөн ауыр ваҡыттарҙа ла, хатта атеизм йылдарында ла Ислам традицияларын һаҡлап ҡалыуға өлгәште. Улар бер ваҡытта ла динде дәүләткә ҡаршы ҡуйманы. Киреһенсә, Ватанға, бигерәк тә Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында, ярҙам итте. Бөгөн дә рухи остаздар - имамдар Украиналағы махсус хәрби операцияла яугирҙарҙың рухын күтәрә, улар Аллаһ тураһында хәтергә төшөрә. Аллаһ телдә генә түгел, ул йөрәктә булырға тейеш. Беҙ Зәйнулла Рәсүлевты иҫкә алғанда, тәү сиратта, Аллаһы Тәғәләне иҫкә алабыҙ. Аллаһы Тәғәләне иҫкә алғанда көс, энергия һәм ҡеүәт арта. Һеҙ ғәмәлдәрҙе Аллаһы Тәғәлә хаҡына башҡарһағыҙ, уны ятатһағыҙ, ул да һеҙгә ярҙам итә. Тыуған ил - был ер һәм бөтөн донъя, тәбиғәт уның ижады. Аллаһы Тәғәләне яратыу, тимәк, уның ижадын яратыу ул".

Философия фәндәре докторы, профессор, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры Зөһрә Рәхмәтуллина, Зәйнулла Рәсүлевтың философияһын илһөйәрлек, гражданлыҡ, бөгөнгө һәм киләсәк, барлыҡ мосолмандарҙың бөйөклөгө һәм үлемһеҙлеген алға һөрөүсе позицияһы менән билдәләп, уның "үҙ халҡының рухи короле" тип лайыҡлы билдәләнеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды.

"Заманының йоғонтоло йәмәғәт һәм дини эшмәкәре булараҡ, ул барлыҡ көсөн, белемен традицион иманды, халыҡтың социаль һәм рухи именлеген һаҡлауға йүнәлтеп, Зәйнулла Рәсүлев үҙ исемен быуаттарға үлемһеҙ итте. Уның рухи мирасы, уйҙары бөгөн дә, глобалләшеү шарттарында, үҙенең рухи тамырҙарын, көсөн, иманын, өмөтөн, һөйөүен эҙләгән заман кешеһе тарафынан ыңғай ҡабул ителә, сөнки ул беҙҙең тамырыбыҙ, бөгөн ныҡ кәрәк булған традицион ҡиммәттәр сығанағы", - тине Зөһрә Йыһанур ҡыҙы.

Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Дәүләт-конфессия мөнәсәбәттәре буйынса совет рәйесе Азат Фәттәхов ил кимәлендә Башҡортостандың мосолман өммәтен үҫтереүҙә айырым роль уйнауын, уның Рәсәй Исламы өсөн тарихи үҙәк булып тороуына, хәҙерге Рәсәй йәмғиәтенең рухи тормошона һәм әхлаҡи нигеҙҙәренә Зәйнулла Рәсүлев кеүек дини лидерҙарҙың ныҡлы нигеҙ һалыуына баҫым яһаны.

Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты мөфтөйө Айнур Бирғәлин һәр халыҡ өсөн мәҙәни код булып һүҙ тороуын билдәләп: "Беҙ - мосолмандар, әммә сағыштырмаса донъяуи тормош алып барабыҙ. Телебеҙҙе белергә тейешбеҙ - әммә уны юғалтабыҙ. Бөгөн кем беҙ: донъяуи кешеләрме, әллә мосолмандармы, телде белергә тейешбеҙме, әллә Исламға нигеҙләнергәме? Был һорауҙар барыһы ла тамырҙарыбыҙҙы юғалтҡанлыҡтан тыуа. Ә уларҙы беҙ глобаль үҙгәрештәр осоронда юғалтабыҙ. Бөгөн, бәлки, динде өйрәнмәгән өсөн тарихты уҡымайбыҙҙыр. Мәҙәни кодыбыҙҙы юғалтабыҙ, уҡыу, белем алыу, меценатлыҡ, йомартлыҡ, изге эштәр ҡылыу һәм Исламдың биш ҡағиҙәһен үтәү артҡы планға күсә бара. Тап Зәйнулла Рәсүлев кеүек исемдәрҙе тергеҙеп, беҙ тарихи хәтеребеҙҙе, халҡыбыҙҙың данын кире ҡайтара аласаҡбыҙ", - тине.

Тарих фәндәре докторы, профессор Айһылыу Юнысова башҡорт суфыйҙарының үҙ белемен, һәләтен, көсөн Көньяҡ Урал, Башҡортостан сиктәренән үтеп, башҡа ергә лә тарата алыуына туҡталды. Уларҙың мөриттәре Рәсәй империяһының, һуңынан СССР-ҙың, Рәсәйҙең төрлө мөйөштәрендә йәшәй. Быны Дағстанда 2016

✓ *Унның Нәҡшбәндиә тәриҡәте бер ҡайҙа ла китмәгән, иң төп вазифа һәм тәриҡәт улына - Ғабдрахман Рәсүлевҡа, Мөжәүир хәҙрәткә һәм Бәҙретдин ишанға бирелә.*



йылда асылған мәсеткә Зәйнулла Рәсүлев исеме биреләүе лә раҫлай. Шулай уҡ Дағстандың Тарки ауылында 30 йыл ошонда Төньяҡ Кавказ мосолмандарына дини белем биргән шәйех Баязит Хәйруллин исемендәге мәсет асылыуы ла башҡорттар өсөн ҙур мәртәбә. Әммә алға китеп шуны ла билдәләргә кәрәк: бинаның атамаһына Баязит Хәйруллин "ҡазанлы" тип яҙыу ғына бер аҙ эсте бошора - хәҙер беҙҙең рухи остаздарыбыҙға ла ҡул һоналар...

Рәсәй мосолмандары Үҙәк Диниә назараты Рәсәй Ислам университетының өлкән уҡытыусыһы, теология докторы Рөстәм Азаматов Зәйнулла Рәсүлевтың йәмәғәт һәм Ислам хоҡуғы өлкәһендәге эшмәкәрлеге менән таныштырып, уның был эшмәкәрлегенең суфыйсылыҡ һәм остазлыҡ эшмәкәрлеге күләгәһендә ҡалыуын, был өлкәлә тикшеренеүҙәр алып барыу кәрәклеген билдәләне.

"Шөкөр, Зәйнулла Рәсүлев һәм башҡа бөйөк дин әһелдәре Башҡортостанына кире ҡайтты", - тигән фекер яңғыраны конференцияла. Шуға ла халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәрен тарих туҙаны ла күммәй, ваҡыты еткәс, улар барыбер ҡабаттан ҡалҡып сыға һәм, башҡа ерҙә тамырланмай, барыбер үҙенең тамырҙарына кире әйләнеп ҡайта.

Үҙенең сығышында шәйех Салауат Килдин: "Беҙ Нәҡшбәндиә тәриҡәте кешеләре. Тәриҡәт - ул имандың, Исламдың үҙе. Тәриҡәттең нигеҙе - ихласлыҡта. Кемдең йөрәге асыҡ - ул тәриҡәт кешеһе. Халҡыбыҙҙың Аллаһы Тәғәлә биргән иң ҙур бүләге - ул ихласлыҡ. Шуның өсөн тәриҡәттә булыу халҡыбыҙҙың тәбиғәтендә ул.

З. Рәсүлевҡа тиклем дә әүлиәләр, шәйехтәр күп булған. Улар беҙҙең уҡытыусылар, беҙҙең тәрбиәселәр, шул уҡ ваҡытта улар Аллаһы Тәғәләнең юғары кимәлдәге заттары. Улар аша Аллаһы Тәғәләнең, бәйғәмбәребеҙҙең нуры, бәрәкәте килә, беҙҙең йәшәү мөмкинлектәре улар аша бирелә. Шуны аңлау өсөн тәриҡәтте аңларға тейешбеҙ. Тәриҡәт аша кешенең йөрәге асыла, йөрәге таҙара һәм дә Аллаһы Тәғәлә менән бәйләнеше нурлана. Кеше Аллаһы Тәғәләнең бәйләнеше аша йәшәй башлай.

Беҙ башҡортто аҫаба халыҡ, тибеҙ ҙә, уны ер-һыуға хужа булыуға ғына ҡайтарып ҡалдырабыҙ. Ул аҫабалыҡтың бер күренеше генә. Аҫабалыҡтың төп мәғәнәһе - ул Аллаһы Тәғәлә менән ихлас, ҡеүәтле, нурлы, даими бәйләнеш. Аҫабалыҡ -ул Аллаһы Тәғәлә алдында ошо матур ер-һыу өсөн яуаплы һәм дә рәхмәтле булыу. Шуның өсөн ата-бабаларҙың күпселеге Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтле булып, уның алдында яуаплы булып, ер-һыу өсөн йәндәрен аямай шаһит булып киткән", - тине.

Был күренештең сере тарих фәндәре докторы Булат Аҙнабаевтың сығышын тыңлағандан һуң асылғандай булды: "Башҡорттар, күрше булып йәшәгән башҡа халыҡтарҙан айырмалы, вертикаль власть иерархияһын булдырмаған, ә улар барлыҡ ырыуҙарҙы берләштергән горизонталь власть менән йәшәгән һәм халыҡ ҡарары тормошҡа ашырылған сәйәси субъект булған. Бындай сәйәси структура монгол империяһы дәүерендә лә, 16-18-се быуаттар осоронда ла асыҡ күренә. Башҡорттарҙы вертикаль власть түгел, ә тап ошо сакраль горизонталь проект берләштерә. Шуға күрә башҡорттар өсөн ер, ландшафт халыҡты берләштереүсе мөһим элемент булып тора. Быны замана тикшеренеүҙәре лә раҫлай. Социологтар яһаған һығымтаға ярашлы, башҡорттар өсөн территорияға бәйлелек, рустар, татарҙар менән сағыштырғанда мөһим берҙәйлек (идентификация) факты булып тора. Рустар, татарҙар өсөн ниндәйҙер территорияға ҡарау 4-5-се урында тора. Башҡорттар бер-береһе менән осрашҡанда әле лә иң элек ҡайҙан булыуын һораша, йәғни борон замандарҙағы кеүек, әле лә бер этнос булһа ла, тыуған урын, тыуған ер төп роль уйнай.

Исламдың Башҡортостанға суфыйсылыҡ формаһында килеүе лә быуаттар буйына формалашҡан территориаль бәйлелек идеяһы Ислам-суфыйсылыҡ үҙәктәре булдырыу, изгеләрҙең ҡәберен зыярат ҡылыу менән ауаздаш, шуға ла дин башҡорттар тарафынан еңел ҡабул ителгән".

Фекер ағышын бер аҙ ғына үҙгәртеп, бөйөк физик Альберт Эйнштейнға мөрәжәғәт итеү зыян булмаҫ. "Донъяла бөтөн нәмә энергия булып тора. Барлыҡ нәмә нигеҙендә энергия ята. Әгәр һеҙ үҙегеҙ өсөн булдырырға теләгән ысынбарлыҡ энергияһы йышлығына көйләнһәгеҙ, тап шуны алырһығыҙ", - ти ул. Йәғни башҡорттар элек-электән ырыу еренә бәйле булып, ошо ерҙең энергияһы менән йәшәгән һәм әле лә шул энергияны ҡулланыуҙы дауам итә. Бында башҡорт халҡының бер мәҡәлен килтереү урынлы булыр, моғайын: үлән үҫкән ерендә үҫә.

Ни өсөн Башҡортостанда әүлиәләр күп булған һәм ни өсөн башҡорттар өсөн ер, йәғни территориаль бәйлелек төшөнсәһе ҙур әһәмиәткә эйә? Элек быны ер көсө, ер ҡеүәте тиерҙәр ине, әлеге ваҡытта уны эгрегор тип атарға мөмкин. Уның асылын төрлөсә аңлаталар, кемдер "уяу" тиһә, икенсе вариантында "йәнде һаҡлаусы фәрештә", тиҙәр, өсөнсөләр иһә "көтөү" тип баһалай. Нисек кенә булмаһын, был төшөнсәләрҙең барыһы ла аҫабалыҡ рухы менән йәшәгән халыҡтар өсөн хас сифаттар: улар һәр саҡ уяу, йәнен имләүсе энергияны тап үҙенең еренән ала, һәм был осраҡта "көтөү" - ул ырыу булып уҡмашып йәшәү. Һәм бында ни өсөн Башҡортостанда әүлиәләрҙең күп булыуы ла асыҡлана: психолог, магик традициялар тарихсыһы һәм биоэнергет Татьяна Верба аңлатыуынса, эгрегор - физик донъянан юғарыраҡ йышлыҡта булған донъяла торған кешеләрҙең энергияһы тупланмаһы, ул беҙҙең донъя менән матди объекттарҙың энергетик ҡыры аша тәьҫир итә. Энергия тупланып, нимәгәлер йоғонто яһаһын өсөн бер үк төрлө уйлаған кешеләр төркөмө кәрәк. Улар ни тиклем күберәк, шул тиклем күберәк энергия туплана һәм ырыу, ғаилә, коллектив һ.б. эгрегоры барлыҡҡа килә. Ырыу эгрегоры тигәндән, ул тап ошо территориаль бәйлелек менән аңлатыла һәм икенсе эгрегорҙан килгән йәки ошо ерҙән икенсе урынға күсенгән кеше унда тыныслыҡ тапмауы мөмкин.

Башҡорттарҙың ни өсөн ергә бәйлелеге һәм үҙҙәрен һаман да аҫаба тип тойоуы аңлашылалыр: улар борон-борондан ошонда йәшәгән һәм ошонда үҙенең эгрегорын булдырған, үҙенең ошо ерендә рухи көс ала, көс туплай һәм шуға ла һаман да ер-һыуын йәнтәне менән ябарға, һаҡларға әҙер. Эйе, Совет йылдарында баҫылып тороп, бер төрлө уйлы кешеләр бергә тупланыу менән ул ҡабаттан "терелә", онотолған исемдәр, улай ғына ла түгел, уларҙың рухы менән бергә бәрәкәте лә ҡайта.

Ошо урында Салауат Килдиндың тағы бер фекеренә туҡталып китмәү мөмкин түгел: "Бөгөн Зәйнулла ишандың юғары рухи кимәле, тәриҡәт сере Дағстанға киткән, тиҙәр. Уның Нәҡшбәндиә тәриҡәте бер ҡайҙа ла китмәгән, иң төп вазифа һәм тәриҡәт улына - Ғабдрахман Рәсүлевҡа, Мөжәүир хәҙрәткә һәм Бәҙретдин ишанға бирелә. Аллаға шөкөр, бөгөнгө көнгә тиклем улар аша беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙа ғына түгел, бөтә Көньяҡ Уралда тәриҡәтебеҙ иҫән һәм көсәйә, ҡеүәтләнә. Үҙебеҙҙең әүлиәләрҙең исемен күҙҙән төшөрөү - ул гонаһ. Шул гонаһта булмайыҡ. Документтар бар, уларҙы ҡарап, халыҡҡа дөрөҫ хәбәр еткерергә кәрәк.

Ни өсөн был турала белдерәм, сөнки ошо юғары әүлиәләребеҙ аша әле булһа беҙгә - халҡыбыҙға, еребеҙгә бәрәкәт килә. Аллаһы Тәғәлә әйткән: "Һеҙ уларҙы үлгән тимәгеҙ, улар тере, тик һеҙ уларҙы тоймайһығыҙ". Беҙ бына ошо тәриҡәттә булып, халҡыбыҙ ихласлыҡта булып, иманда булып, Аллаһы Тәғәлә биргән бәрәкәтте, Аллаһы Тәғәлә биргән нурҙы, Аллаһы Тәғәлә биргән һөйөүҙе алып, халҡыбыҙ ихлас булып, иманлы-ғүмерле, илебеҙгә, еребеҙгә хужа булып, Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтле булып йәшәргә насип итһен".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорттарҙан барлыҡ ыңғай күренештәрҙе үҙҙәренеке итергә теләп яҫҡыныусылар һәр заманда ла булып торған. Әммә һуңғы йылдарҙағы тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә асыҡланыуынса, Ғабдрахман Рәсүлев атаһының - Нәҡшбәндиә ордены рухи остазы Зәйнулла Рәсүлевтың тулы хоҡуҡлы вариҫы булыуы дәлилдәр менән раҫлана. Был тәриҡәт шәйехтәре һәм уларҙың вариҫтары беҙҙең быуат башына тиклем үҙ эшмәкәрлектәрен алып бара һәм шуға ла тәриҡәт традициялары Башҡортостанда бөгөн дә дауам итә. Ул ғына ла түгел: "Тәссауыф мәҙәниәте сик-араларҙы, хатта сик араларын танымай. Зәйнулла ишандың хәлифәләре фани донъянан китһә лә, уларҙың бәрәкәте әле булһа беҙҙең менән, һөйөклө Башҡортостаныбыҙҙа", - тигәйне сара модераторы, филология фәндәре кандидаты Искәндәр Сәйетбатталов. Үлән үҫкән ерендә, үҙ мөхитендә, тыуған ере энергияһында ғына үҫә. Һәм үҙебеҙҙең шундай бөйөк шәхестәребеҙҙе ҡайҙалыр ситтәргә биреп ҡуйырға түгел, киреһенсә, уларҙы һаҡларға, уларҙы күтәрергә, уларҙың ошо ерлектә генә тыуған ҡеүәтен, бәрәкәтен арттырырға кәрәк.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

Шундай көләмәс ишеткәнегеҙ бармы: яр буйында бер балыҡсы балыҡ ҡармаҡлап ултыра, ти. Балыҡтарҙың бер төрлө ҙурлыҡтағыларын алып ҡала ла, бәләкәйҙәрен һәм ҙурҙарын кире йылғаға ебәрә икән. Ситтән берәү күҙәтеп торған да, эргәһенә килеп, аптырап һораған: "Ни өсөн эре балыҡтарҙы кире ебәрәһең?" "Эй, табам бәләкәй, эре балыҡтар һыймай..." - тип яуаплаған балыҡсы.

Шуның кеүек, бик күп инаныуҙарыбыҙ һәм ғәҙәттәребеҙ ошо таба кимәлендә, беҙ шуға өйрәнгәнбеҙ һәм нимәнелер үҙгәртергә теләмәйбеҙ.

Ошоға оҡшаш тағы бер миҫал кәрәкме? Грек философы, Платондың уҡыусыһы, беҙҙең эраға тиклем 4-се быуатта йәшәгән легендар тарихи шәхес Аристотель логик фекерләү һәләте менән дан ҡаҙанған һәм беҙҙең заманда ла уның логикаһын юғары уҡыу йорто тамамлаған әллә күпме студентҡа һеңдерҙеләр. Ул метафизиканы физиканың - камиллашыуға ынтылыш хас булған фәндең нигеҙе тип һанай. Уның фекеренсә, әгәр беҙ бер бейеклектән ике матдә ташлаһаҡ һәм уларҙың береһененең ауырлығы икенсеһенекенән ике тапҡырға ҙурыраҡ булһа, ауырыраҡ нәмә ергә тиҙерәк төшөп етәсәк.

Математик, философ һәм физик Галилей 19 йәшендә Пизан соборында бәүелеп торған люстраға иғтибар итә һәм маятниктың хәрәкәте менән идара иткән законды аса. Ул Пизан башняһы башына төрлө ауырлыҡтағы ике пушка йәҙрәһен күтәреп мендерә һәм уларҙы бер үк ваҡытта ергә ташлай. Шул замандағы ғалимдарҙы аптыратып, йәҙрәләр икеһе лә бер үк ваҡытта ергә төшөп етә.

Ябай тәжрибә ярҙамында быуындан-быуынға һеңдерелә килгән ялған инаныуҙарҙы кире ҡағыу өсөн 1800 йыл кәрәк була.

## Инаныуҙарығыҙҙы нисек программаларға?

Асыҡлауыбыҙса, тормошобоҙ - уйҙарыбыҙ емеше. Әммә улар ҡайҙан алына, уларҙың тамыры ҡайҙа?

Кеше мейеһен ҡеүәтле компьютер тип ҡараһаҡ, уйҙар монитор экранынан уҡыған мәғлүмәткә оҡшаш. Улар компьютерға индерелгән махсус программаларға ярашлы барлыҡҡа килә. Һеҙҙең тормош тәжрибәгеҙ ҙә шулай туплана. Барыһы ла инаныуҙарығыҙҙың программа тәьминәтенә бәйле.

"Борт компьютеры"ның эшләүен белер өсөн ҡайһы бер инаныуҙарығыҙға күҙ һалайыҡ. Шуға иғтибар итегеҙ: һәр инаныу теге йәки был тормош хәл-торошо өсөн старт булып тора.

- Һеҙ бәхет аҡсала түгел, тип иҫәпләйһегеҙ.
- Һеҙ бар йомортҡаларҙы ла бер кәрзингә һалырға ярамай, тип иҫәпләйһегеҙ.
- Һәр ваҡытты ла запас вариант әҙер булырға тейеш, тип иҫәпләйһегеҙ.
- Үҙегеҙҙе страховка полистары, патенттар, сигнализация системаһы һәм пенсия фондтары менән һаҡланырға кәрәк тип иҫәпләйһегеҙ.
- Ҡартлыҡҡа аҡса йыйырға кәрәк, тип иҫәпләйһегеҙ.

**Тағы башҡа бик күп инаныуҙар бар:**

- Гонаһ - тамуҡҡа, изге эштәр ожмахҡа алып бара, тип иҫәпләйһегеҙ.
- Мускулдарығыҙға кәрәкле аҡһым алыу өсөн ит ашарға кәрәк, тип иҫәпләйһегеҙ.
- Ябығыр өсөн физик күнегеүҙәр эшләргә кәрәк, тип иҫәпләйһегеҙ.
- Ни тиклем тәмәкене күберәк тартһағыҙ, шул тиклем яман шеш менән ауырыу хәүефе арта, тип иҫәпләйһегеҙ.
- Ата-әсәләр балаларының уҡыуына түләргә тейеш, тип иҫәпләйһегеҙ.

**Һәм тағы бер инаныу бар:** һеҙ башҡаларға ярҙам итә алам, тип иҫәпләйһегеҙ.

Ваҡыт табып, ошо инаныуҙарҙың әҙемтәләрен анализлағыҙ, үҙегеҙгә тәнҡит күҙлегенән ҡарап, тормошоғоҙға дөрөҫ баһа бирергә тырышығыҙ.

**Пьер МОРАСИ.**

✔ *Бер ҡатын полиция бүлегенә ут төртөргә маташа, ә уны был аҙымға "Үҙәк банктың хәүефһеҙлек хеҙмәте хеҙмәткәре" өгөтләй. Ҡатынды бүлексә эргәһендә ҡулға алалар, һәм ул барыһын да һөйләп бирә.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 9 ИЮНЬ - ХАЛЫҠ-АРА ДУҪТАР КӨНӨ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**21-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Сәғәт. Тәбиғәт. Поэма. Ҡыуаҡ. Тарих. Орлоҡ. Бур. Зар. Ҡоҙоҡ. Орбита. Сауҙа. Инсан. Еләп. Негр. Ҡыҙыл. Аҡса. Келәт. Район. Спартак. Йылҡы.

**Вертикаль буйынса:** Биосфера. Ҡурсаулыҡ. Заказник. Тула. Енисей. Ҡорот. Сәбәп. Кәртә. Тупраҡ. Экосистема. Ҡарға. Тотҡа. Күл. Таҡ. Инҡар. Озон. Оҫта. Хаҡ. Нил.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**14 июнь "Алтын асҡыс - remake"** (А. Толстой), музыкаль мажара. 11.00 6+

**15 июнь "Итекле бесәй"** (Ш. Перро, В. Ганзенко инсц.), әкиәт. 11.00 6+

**16 июнь "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 16+

**17 июнь "Итекле бесәй"** (Ш. Перро, В. Ганзенко инсц.), әкиәт. 12.00 6+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**13 июнь "Волшебник Изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 10.30 0+

**14 июнь "Холодное сердце"** (В. Гауф), әкиәт. 10.30 6+

**16 июнь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 10.30 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*

**17 июнь "Три поросенка"** (Д. Гараева). 12.00, 14.00 0+

**18 июнь "Гадкий утенок"** (Г.Х. Андерсен). 12.00, 14.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**12, 13, 14, 15, 16 июнь "Хәүефһеҙ каникулдар"** (Л. Ниғмәтуллина), лекторий. 10.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**13 июнь "Ғүмерлек ғазап"** (С. Әбүзәр), мелодрама. 12+

**14 июнь "Һағыштарым тулы ғазаптарым..."** (Я. Пулинович), мелодрама. 12+

**15 июнь "Мөхәббәтте ергә ҡарап түгел, Йондоҙҙарға ҡарап көткәнмен!"** (Г. Саламатова), театрлаштырылған концерт. 12+

**16-17 июнь "Таңбатыр"** (М. Ғиләжев), әкиәт. 11.00 0+

## БР Милли музейы

**12 июнь "Рәсәй көнө"** фильм. 15.00 6+

**"Мин - Рәсәй гражданы!"** ғаилә өсөн викторина. 15.00 6+

**"Совет осорондағы Өфө модаһы"** акция. 11.00 0+

**15 июнь Башҡорт сәнғәт кәсептәре: Ағиҙелдең ҡулдан эшләнгән даны"** күргәҙмәне асыу. 15.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Июнь (Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 12 (23) дүшәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 19:04 | 21:50 | 23:20 |
| 13 (24) шишәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 19:04 | 21:51 | 23:21 |
| 14 (25) шаршамбы | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 19:04 | 21:51 | 23:21 |
| 15 (26) кесе йома | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 19:04 | 21:52 | 23:22 |
| 16 (27) йома | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 19:04 | 21:52 | 23:22 |
| 17 (28) шәмбе | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 19:04 | 21:53 | 23:23 |
| 18 (29) йәкшәмбе | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 19:04 | 21:53 | 23:23 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ИҪКӘРТӘБЕҘ!*

# ТАҒЫ БЕР АЛДАҠ



**Украина кол-үҙәктәре ваҡытында түләнмәгән банк кредиттары булған рәсәйҙәргә һөнәр башлаған.**

Улар "хоҡуҡ һаҡлау органы" йәки "банктың хәүефһеҙлек хеҙмәте" вәкиле булып шылтырата һәм кредит буйынса бурыстарҙы ҡаплау иҫәбенә хоҡуҡ боҙорға тәкдим итә. "Был турала мәғлүмәт менән һатыу итеү ағымға ҡуйылған, шуға күрә ҡорбан табыуы ауыр түгел. Үкенескә күрә, ышаныусылар табыла. Әҙемтәһе турала уйлап тормайынса, улар һунынан енәйәт яуаплылығы янаған ғәмәлдәр башҡарырға ризалаша", - ти "Справедливая Россия - За правду" фирҡәһе рәйесе Сергей Миронов. Миҫал итеп ул күптән түгел Петрозаводскиҙа булған ваҡиғаны килтерә. Унда бер ҡатын полиция бүлегенә ут төртөргә маташа, ә уны был аҙымға "Үҙәк банктың хәүефһеҙлек хеҙмәте хеҙмәткәре" өгөтләй. Ҡатынды бүлексә эргәһендә ҡулға алалар, һәм ул барыһын да һөйләп бирә - ут төртөү өсөн уға банк кредитын ҡапларға вәғәҙә иткән булалар. "Тиҙ ышаныусан кешеләр алдана, шуға улар провокацияға бирелмәҫкә, ә ошондай фактар турала шунда уҡ хоҡуҡ һаҡлау органдарына хәбәр итергә саҡырам", - ти Сергей Миронов.

ҠЫҪҠА ИНТЕРВЬЮ

# "ЕҢЕҮЕМДЕ...

## атайыма бағышлайым"

**"Урал аръяғы-2023" Бөтөн Рәсәй инвестиция һабантуйы сиктәрендә Сибай ҡалаһының үҙәк майҙанында "Ирәндек моңдары" Халыҡ-ара башҡорт йырын башҡарыусылар бәйгеһе еңеүселәре билдәләнде. Гран-призы быйыл Сибай ҡалаһынан Нух ҠОТОЕВ яуланы, төп бүләк - "Лада Гранта" автомобиле асҡысын уға Республика Башлығы Радий Хәбиров үҙе тапшырҙы.**

**Нух, был һеҙҙең беренсе ҙур еңеүегеҙме, ниндәй тойғолар кисерәһегеҙ, киләсәккә ниндәй уй-хыялдар менән йәшәйһегеҙ?**

- Мин бик һәләтле халыҡ йәшәгән Баймаҡ районы Буранбай ауылынан. Халыҡ йырҙарына һөйөүҙе атайым Мазһар Мәғәҙей улы менән әсәйем Гөлсирә Дидар ҡыҙы тәрбиәләне. Әсәйем әле минең был сығышымды ла ҡарар өсөн ауылдан килеп етте. Үкенескә, атайымдың фани донъяға күсеүенә бер йыл инде. Мин был еңеүемде уның рухына бағышлайым. Ул минең менән, моғайын, ғорурланыр ине. Ағайым, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Марсель Ҡотоевтың башҡорт йырына булған тоғролого, уны башҡарыу йәһәтенән үҙүҙенә талапсанлығы ла өлгө миңә. Беҙҙең башҡа туғандарыбыҙ ҙа матур йырлай. Вилдан ҡустым да "Ирәндек моңдары"нда ҡатнашты быйыл.

Минең халыҡ йырҙарын башҡарыуымды юғары баһалаған жюри ағзаларына ҙур рәхмәтемде белдерәм. 2016 йылда, Сибай колледжы студенты сағымда был бәйгелә беренсе урын алғайным. Ете йылдан һуң Гран-приға эйә булдым. Миңә белем биргән һәм ҡанат ҡуйған Сибай сәнғәт колледжына, уҡытыусым, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Динар Ласыновҡа ла рәхмәтлемен.



Киләсәккә ниәттәргә килгәндә, үҙем эшләп киткән Сибай филармонияһына кире эшкә ҡайтырға, Өфө дәүләт сәнғәт институтында уҡыуымды дауам итергә теләйем. Бүләк өсөн дә рәхмәт, был минең тәүге автомобилем, хәҙер водитель таныҡлығына уҡырға кәрәк буласаҡ.

**Йырсы булараҡ, музыка йүнәлештәренең ҡайһыһы күңелегеҙгә яҡыныраҡ?**

- Төрлө жанрҙарҙа ла йырлайым, халыҡ йырҙарын да, эстраданы ла, опера партияларын да. Шулай ҙа башҡорт халыҡ йырҙарын айырыуса яратам. Быйыл бәйгелә "Сибай" менән "Буранбай"ҙы башҡарҙым. "Сибай" - бик моңло, һәлмәк йыр, уны башҡарғанда төрлө импровизация алымдарын ҡулланып була. Кантон башлығы Шәйәхмәт Сибаевтың тыуған яғын, Ирәндек тауҙарын, унда ҡалған ҡатыны Фатиманы һағыныу һағышы сағылып ятҡанға күрә лә, ул моңлораҡтыр ҙа. Тамашасы ла уны бик ярата. "Буранбай" иһә сәсән, ҡурайсы, ҡыйыу ир уҙаманы хаҡында. Үҙ ерҙәренә, халҡына ҡалҡан булған сәсәнде әҙәрлекләп, Себер һөргәс, уға бағышланған ошондай иҫ киткес йыр тыуа халыҡ күңелендә.

Шуны ла әйтер инем, башҡорт халҡының оҙон көйҙәрен башҡарғанда йырсының тәбиғи һәләте, ниндәйҙер нотаrange ала алыуы төп урында тормай, һин был йыр, ундағы тарихты үҙең кисерергә, йырҙың һәр бөгәлөнә һалынған хистәрҙе тойорға, уны аңларға тейешһең. Бына мин дә йырлап торам, урмандарыбыҙ, тауҙарыбыҙ, батырҙарыбыҙ, уларҙың яҙмыштары күҙ алдынан үтә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт халыҡ йырын таратыусы, йәш талантарҙы асыҡлаусы был бәйгелә быйыл 63 кеше ҡатнашып, уларҙың 33-сө 17 йәшкә тиклемге балалар булды. Тимәк, башҡорт йырын киләсәктә улар йәшәтәсәк, быуындар бәйләнеше шулай барлыҡҡа килә лә инде. Ә Нух Ҡотоевҡа киләсәктә тағы ла еңеүҙәр шатлығы кисерергә насип булһын.**

**Римма ЙОНОСОВА әңгәмәләште.**

АФАРИН!

# ҠУРАЙСЫЛАР ЯРЫШТЫ



**Йылайыр районында атаҡлы ҡурайсы Ишмулла Дилмөхәмәтовтың 95 йыллығына арналған башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарында уйнаусыларҙың республика конкурсы тамамланды.**

Проект республиканың муниципаль районлары һәм ҡала округтарының мәҙәниәт өлкәһендәге бренд саралары исемлегендә. Сара башҡорт халыҡ ҡоралдарында уйнау традицияларын һаҡлауға һәм артабан үҫтереүгә, һәләтле башҡарыусыларҙы асыҡлауға, йәштәрҙе башҡорт инструменталь фольклорына йәлеп итеүгә, башҡорт халҡының милли ғөрөф-ғәҙәттәрен һәм йолаларын популярлаштырыуға, ҡурайҙа уйнау сәнғәтен пропагандалауға йүнәлтелгән.

Ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, быйыл Башҡортостандың 16 район һәм ҡалаһынан: Әбйәлил, Белорет, Федоровка, Күгәрсен, Благовещен, Баймаҡ, Өфө, Хәйбулла, Йылайыр райондарынан, Өфө, Сибай, Туймазы, Салауат, Стәрлетамаҡ, Мәләүез, Учалы ҡалаларынан, шулай уҡ Силәбе өлкәһенең Арғаяш районынан, Марий Эл Республикаһынан музыканттар ҡатнашты. Ҡурайсы-солистар араһында Гран-призы Благовещендан Айнур Назаров яуланы. Ул 100 мең һумлыҡ сертификат менән бүләкләнде.

Төрлө йәштәге ҡурайсылар араһында Илһам Юлгилдин (Йылайыр районы), Алмаз Бикмәтов (Силәбе өлкәһе), Айнур Әминев (Сибай), Илнур Хәйруллин (Өфө), Радмир Ғүмәров (Өфө) еңеүгә өлгәште. Конкурстың иң оло ҡатнашыусылары - Марий Эл Республикаһынан 81 йәшлек Муса Нурдәүләтов һәм Стәрлетамаҡтан 71 йәшлек Фуат Юнысбаев маҡтауға һәм һокланыуға лайыҡ. Иң йәш ҡатнашыусы иһә Сибайҙан 8 йәшлек Эмиль Савинкин.

Ансамблдәр араһында беренсе урынды "Аҡбуҙат" ҡурайсылар ансамбле (Туймазы ҡалаһы), Буранбай сәсән исемендәге халыҡ ҡурайсылар ансамбле (Баймаҡ ҡалаһы) яуланы.

Думбырала Алмас Ишмөхәмәтовҡа һәм Илмир Аҡбашевҡа (икеһе лә Өфөнән), ҡыл-ҡумыҙҙа Ләйлә Шәйәхмәтоваға (Әбйәлил районы) һәм Рушана Әбсәләмоваға (Өфө ҡалаһы) тиңдәр булманы.

Байрам ваҡытында Йылайыр районында "Атайсал" проекты сиктәрендә танылған ҡурайсы, йырсы, композитор, актёр һәм драматург Ишмулла Дилмөхәмәтовтың тыуыуына 95 йыл тулыу уңайынан ҡурайға һәйкәл асыу тантанаһы да үтте. "Идея һәм проект авторы - билдәле ҡурайсы, Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Азат Айытҡолов. Был эште атҡарып сығыуҙа уға яҡташтары - Йылайыр ҡурайсылары ярҙам итте, - тип яҙҙы Йылайыр районы хакимиәте башлығы Борис Мелкоедов. - Һәйкәл эшләп ҡуйыуҙа ҡатнашҡандарҙың барыһына ла рәхмәт белдерәм".

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҠШЫ БАЛАҒА...

## ата малы кәрәкмәй

Ябағаны яуға менмә, ялы бар, тип; яман менән ҡоҙа булма, малы бар, тип.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йәшлектә нисек булһа, ҡартлыҡта шулай була. Йәшлектә үҙләштергән матур ғәҙәттәр ҡартлыҡ ғүмерендә еңеләйтер, насар ғәҙәттәр - ауырлаштырыр.

**(Дмитрий Лихачев).**

Биш йәшендә "ярай" һәм "ярамай" тигәндең айырмаһын белмәгән бала уны үҫкәс тә белмәйәсәк.

**(Илья Шевелев).**

Баланан кумир яһама, үҫкәс, ҡорбан талап итер.

**(Пьер Буаст).**

Дошманың ас булһа - ашат. Сарсаған булһа - эсер. Ошоларҙы эшләһәң, уның башына яныусы ҡуҙ һалырһың.

**(Апостол Павел).**

Һәр гений - бер аҙ ғына бала, һәр бала - бер аҙ ғына гений.

**(Артур Шопенгауэр).**

Йөрәк менән баш көрәшенең аҙағында ... ашҡаҙан еңә.

**(Станислав Ежи Лец).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер батша һарайы алдында бейек тирәк үҫкән. Бер саҡ шул тирәккә оя ҡорған ике сәүкә салына батша күҙенә. Батшаға был ҡоштарҙың ҡылығы ҡыҙыҡ тойола һәм ул уларҙы күҙәтә башлай: ата сәүкә көн дә ояһынан ҡайҙалыр алыҫҡа осоп китә һәм бер аҙҙан инә сәүкәгә һәм ҡошсоҡтарына аҙыҡ килтереп ашата. Әммә бер көндө ата сәүкә киткәс, был ояға сит ата сәүкә осоп килә һәм инә сәүкәне әүрәтеп, үҙе менән осороп алып китә. Ата сәүкә әйләнеп ҡайта, ҡошсоҡтарын ашата һәм башҡа көндәрҙә ул бер ҡайҙа ла осмай, ҡошсоҡтарын һаҡларға ояһында ҡала.**

**Бер нисә көн үтә. Ояла бер ниндәй ҙә йәнлелек һиҙмәгәс, батша үҙенең бер хеҙмәтсеһен ағас башына мендереп ебәрә. Хеҙмәтсеһе уға ояларғы ата сәүкәнең дә, ҡошсоҡтарҙың да астан үлеүен хәбәр итә. Батшаға был хәл шул тиклем ныҡ тәьҫир итә. Инә сәүкәнең хыянаты бөтөн донъяһын әйләндереп ташлағандай була. Батша тәхетенән, ҡатынынан, балаларынан баш тартып, монастырға китә.**

**Әммә батшаның ҡатыны, балалары астан үлгәндә лә, иренә тоғро ҡала. Бер аҙҙан ҡайғыһына түҙмәй, үҙе донъя ҡуя. Шулай итеп, батшаның бар тоҡомо ҡорой. Ҡоштар һәм кешеләр һәр береһе үҙ ҡануны менән йәшәй икәнен белмәгән була шул батша..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 23022

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 9 июнь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3267
Заказ - 759